✓ *Бер сит ил илсеһе Екатерина Икенсенән шулай тип һорай икән: "Һеҙ, ғәли йәнәптәре, нисек итеп үҙегеҙҙең тәртипһеҙ дворяндарығыҙҙы тыңлата алыуға өлгәшәһегеҙ?" Екатерина Икенсе шулай тип яуап биргән: "Мин уларҙы бер ваҡытта ла үҙҙәренә файҙалы булмаған эште эшләргә мәжбүр итмәйем".*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№23 (493)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бала сағында бәхетләләр -**

ғүмер буйы бәхетле



4

**Иң тылсымлы әмәл...**

ул музыка



6

**Аяҡ аҫтыбыҙҙа ғына...**

дауалаусы, терелтеүсе дауа



8-9

**Сәлйеғол мөғжизәһе...**



12-13

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Республиканың иң баш ҡалаһы, арҡа мейеһе булған Өфөбөҙ һоҡландырамы, әллә ҡайһы саҡта йәнде лә әрнетәме?

**Рудоль ӘҮСӘХОВ, архитектор:** Үҙемдең баш ҡалабыҙға мөнәсәбәтемде пациенты яҙмышы хаҡында табип көйәләнеүҙәре менән сағыштырыр инем. Шул уҡ ваҡытта үҙемде уның өсөн борсолоусы ата-әсә ролендә лә тойоп китәм дә, үҙ-үҙемә шундай һорау бирәм: ҡалабыҙ тулы ҡеүәтенә йәшәһен өсөн бөтәһен дә эшләнемме икән?

Миллиондан ашыу халҡы булған гигант ҡалабыҙ Өфө үҙенә генә хас "ауырыуҙары", үҫеш һәм ҡартайыу проблемалары менән ысын мәғәнәһендә ниндәйҙер бер тере организмды хәтерләтә. Бер ҡасан да күрелмәгән автомобиль ташҡынын, насарлана барған экологияны, торлаҡ, балалар баҡсаһы буйынса урындар наҡыҫлығын, төҙөк кенә йорт ихаталарының емерелә барыуы кеүек проблемаларҙы көскә-көскә булһа ла ҡулда тотоп килә әле ул. Быға күп йәһәттән ҡала етәкселегенә йәш, ҙур тәжрибә юлы үткән һәм ҡала эшмәкәрлеге өсөн ысын күңелдән янып-көйгән, һөнәри яҡтан әҙерлекле менеджерҙар килеүе булышлыҡ итә. Урамдарыбыҙ иркенәйә, яңы магистралдәр һәм юл армыттары, торлаҡ, сауҙа үҙәктәре, сәнәғәт предприятиелары төҙөлә - тимәк, ҡала йәшәй, уның киләсәге ҙур! Өфө матурлана һәм баш ҡала киңлектәрен яулай бара.

Шул уҡ ваҡытта хәл ителеше һуҙылған осраҡта берәй 5-10 йылдан "дауалап булмаҫлыҡ ауырыуҙар" пәйҙә булып, ҡала тормошон туҡтатыу хәүефенә килтерә торған проблемалар ҙа бар. Мәҫәлән, әгәр ҙә Дим һәм Затонды Черниковка менән тоташтырыусы өҙлөкһөҙ хәрәкәт итеүсе көнбайыш юл магистрален проектлау һәм төҙөүҙе һуҙғанда, Интернациональ урамы асылышында Октябрь проспектынан хәрәкәт көсөргәнешен алыу буйынса Салауат Юлаев проспектынан да һөҙөмтәлерәк күпер төҙөлөшөн бөгөндән башламағанда, был ярымутрау эсендә хәрәкәт итеү мөмкинлеге юҡҡа сығасаҡ. Бынан тыш, ҡалабыҙ проблемалары тиҙерәк хәл ителһен өсөн урындарҙағы ҡала төҙөлөшө көстәрен үҫтереү, улар иҫәбенә ҡала төҙөлөшөн планлаштырыусы эре һәм ҡеүәтле проектлау ойошмаһы булдырыу зарур. Өфө ҡалаһының генераль планын тормошҡа ашырырға тотонорлоҡ һәләтле кадрҙар беҙҙә бар, фәҡәт ҡала хужаларының изге ихтыяры ғына кәрәк.

**Фәүзиә ЛАТИПОВА, журналист:** Өфөгә 13 йәштән интернатҡа уҡырға килеп, бала саҡтан ошо ҡалала йәшәй башлағас, унең һәр урамы, һәр мөйөшө яҡын һәм таныш. Тыуған ауылым миңә бәләкәй ватаным булһа, Өфөм унда эскән һыуым, һулаған һауам, ейгән ризығым аша күңелемде мәңгелеккә биләп алыусы оло ватаным ул. Беҙ йәшерәк осорҙа, ил менән Хрущев етәкселек иткән йылдарҙа, береһен икенсеһенән айырып алғыһыҙ бер иш торлаҡ йорттар бик күп төҙөлдө. Шул осорҙа Черниковка биҫтәһендә "восьмиэтажка" исеме менән билдәлелек алған ул осор өсөн бик бейек йорт та һалынды. Ул ваҡытта ла, унан һуң да күпме ғүмер кисерелде, әммә шул йылдар эсендә ҡалабыҙ йөҙөндә республикабыҙға исем биргән халыҡ рухын һәм сәнғәтен сағылдырыусы бер генә милли биҙәк тә күренмәне. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында ошо йәһәттән ниндәйҙер ҡыйыуһыҙ ғына ынтылыш булып алды ул. Бер нисә йорт ҡыйығының кәрнизендә башҡорт орнаменттары пәйҙә булды ла, артабан ундай тәжрибә туҡталып ҡалды. Республиканың төп халҡы рухына яуап бирерҙәй берҙән-бер мөйөш - Салауат Юлаев һәйкәле генә тороп ҡалды.

Баш ҡалабыҙ күренешендә, миңә ҡалһа, һуңғы ваҡыт ике донъяға бүленеш күҙәтелә: байҙар, йәғни миллионерҙар һәм ябай халыҡ - ярлылар кварталдары барлыҡҡа килде. Байҙар кварталдары барлыҡҡа килгән һайын, ҡаланың милли йөҙө юғала бара. Баш ҡала статусын йөрөткән ҡаланың архитектураһы һәм биҙәлеше, минеңсә, мотлаҡ урындағы милли ерлеккә нигеҙләнергә тейеш. Әйткәндәй, шулай бер саҡ Төркиәнән килгән ҡатын-ҡыҙҙар делегацияһы менән Өфө буйлап йөрөргә тура килгәйне. Араларында башҡорт телен өйрәнеүсе уҡытыусы ҡыҙ Хәбибәнең, бик тә ғәжәпкә ҡалып: "Ниңә Өфө урамдарында башҡортса яҙыуҙар бик әҙ?" - тигән һорауына ни тип яуап бирергә лә белмәүем иҫкә килеп төштө. Бик уңайһыҙ булғайны шул саҡ миңә. Ысынлап та, баш ҡала үҙенең архитектураһы, биҙәлеше менән генә лә үҙе хаҡында күп мәғлүмәтте биреп торорға тейеш бит...

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ*

# БАШҠОРТ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНАН...

## башҡорт мәктәбенә күсеү еңелерәк

**Ҡалаларҙа балаларҙы туған теленә өйрәтеү, туған телдә аралаштырыу еңел булмаған эш. Был йәһәттән Өфөнөң 13-сө башҡорт башланғыс мәктәбе-балалар баҡсаһы үҙ бурысын лайыҡлы һәм уңышлы башҡарып килә. Баш ҡалала башҡорт балалар баҡсаһы булған берҙән-бер мәғариф усағы ул. Баҡсанан сыҡҡас, ҡыҙҙар-малайҙар ошо уҡ учреждениеға башланғыс мәктәпкә бара һәм туған телендә дүрт йыл белем ала.**



(Дауамы 16-сы биттә).

✓ Ҡала үҫешенә аныҡ файҙа килтергән уның хөрмәтле кешеләре, яҙыусылар, ғалимдар, уҡытыусылар, йә булмаһа өлгөлө, матур ғаиләләрҙең портреттары ла эленеп торһон ине күрмәлекле урындарҙа...



ИШАРА

# БЕҘ НИ ӨСӨН...
## социализмды емерҙек?

**Гәзитебеҙҙең 17-се һанында Әғләм Шәриповтың француз ҡыҙы Южени Кати менән ҡорған "Ни өсөн беҙ коммунизм төҙөмәнек?" тигән әңгәмәһен уҡып, күптәр уйланып йөрөгәндәр. Эйе, беҙҙең илдә социализм ҡоролошо емерелгәс, иң беренсе булып французлар ҡайғырған, тип ишеткәйнем. Эшсе ҡатламдың күтәрелеше уларҙың хәтерендә һаман йәшәйҙер шул. Улар "Бастилияны алыу" көнөн әле лә билдәләйҙәр бит.**

Кеше нимә тураһында булһа ла хыяллаһын, нимәгәләр ынтылырға тейештер. Яҡты киләсәккә ынтылыу көс-дәрт бирә бит. Диндә йәннәт вәғәҙә ителә, ә 1917 йылдан һуң, дин тыйылғас, социализмға, һуңынан коммунизмға ынтылыш уйлап сығарыла. Танышым Шамил Юлдашбаевҡа (техник фәндәр кандидаты, Өфө авиация техник университеты уҡытыусыһы) шылтыратып, француз ҡыҙының һорауын бирҙем. Ул тәүҙә көлөп алды ла (күрәһең, беҙҙең илдә лә социализм төшөнсәһен онотоп бараларҙыр. Шуға ла былдай һорау бирелеүенә аптырап ҡалалар) ошолайыраҡ яуап ҡайтарҙы: "Социализм ҡоролошон аңлап була. Уның тезисы: хеҙмәтенә ҡарап - хөрмәт. Ә бына коммунизм лозунгыһы: һәр кемгә - ихтыяжын ҡәнәғәтләндергәнсе. Ә ихтыяж үҫә бара бит. Әҙәмдең нәфсеһе аҙа бара..." Танышымдың был яуабын ишеткәс, был гонаһлы ер йөҙөндә коммунизмды барыбер төҙөп булмаҫ ине, тигән һығымтаға килдем.

Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағында оло йәштәрҙәге күршем Мария инәй: "Өләсәйем, маңлайы тамғалы кеше башлыҡ итеп ҡуйылғас, ил емерелер, тәүҙә ризыҡ юҡлыҡтан халыҡ ыҙа сигер, ә һуңынан кешеләрҙә бөтәһе лә булыр, тик үрелеп ала алмаҫһығыҙ, тиер ине. Былар боронғо китапта яҙылған, тип тә өҫтәп ҡуйыр ине", - тип һөйләй торғайны. Был һүҙҙәр бөгөнгө заманға тап килеп тора бит. Ҡытай халҡының бер боронғо әйтеме бар: "Аҡыллы кеше - тотош ил өсөн ҙур фажиғә". Тимәк, хакимлыҡҡа "аҡыллы кеше" килһә, ил ҡоролошон емерә, вата башлай. Ә бит боронғоларҙың йәш быуыны аталарына тоғро булған, уларҙың эшен дауам иткән. Илен, ерен, халҡын һөйгән. Бөтә үткәндәрҙе инҡар иткән үҙгәртеп ҡороуҙар илде ҡаҡшата. Шул уҡ ваҡытта күпме боронғо китаптар уҡылмаған, боронғоларҙың белеме өйрәнелмәгән. Шул сәбәпле хата артынан хата эшләп йәшәгән кешелек донъяһы нисек коммунизм төҙөһөн инде?

Наполеонды, Гитлерҙы еңгән ил бына 20 йылдан ашыу ваҡыт аяҡҡа баҫа алмай ҡаңғырып йәшәп ята. Ә бына Ҡытайға - афарин! Социализмын емермәйенсә, баҙар иҡтисадын ҡабул итте. Шуға ла минең тел осомда: "Беҙ ни өсөн социализмды емерҙек?" тип һорау урала ла тора...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Республиканың иң баш ҡалаһы, арҡа мейеһе булған Өфөбөҙ һоҡландырамы, әллә ҡайһы саҡта йәнде лә әрнетәме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл СӘЛИМЙӘНОВА, Стәрлетамаҡ районы Рощинский ҡасабаһының балалар баҡсаһы мөдире, Бөтә Рәсәй осталыҡ конкурсы лауреаты:*** Өфөлә эш буйынса йыш булырға тура килә, башҡа йомоштар ҙа төшөп тора, ләкин унда нисә барһаң да, һәр ваҡыт тулҡынланыу хисе кисерәһең: иҫән генәмеһең, баш ҡалам, ни хәлдәрең бар, ни яңылыҡтарың менән ҡыуандырырһың, тигән уйҙар йүгерә баштан. Сөбханалла, айлап түгел, көнләп үҫә, үҙгәрә, төҙөкләнә ул. Минә бигерәк тә шуныһы оҡшай: баш ҡалаға инеп килгәндә, сәләмләп, ҡолас йәйеп ҡаршылаусыбыҙ бар беҙҙең, ул - ярһыу арғымаҡлы Салауат. "Һаумы, батырыбыҙ, һаумы, туғаным," - тиемен мин уның сәләмләүенә яуап итеп. Бик тә урынлы, матур, күрмәлекле ерҙә урынлаштырылған һәйкәл. Өфөбөҙҙөң үҙенсәлекле бер символы ул. Ғаиләм менән килгәндә лә беҙ уның янына бармай ҡайтмайбыҙ.

Һуңғы йылдарҙа ҡала урамдарында башҡортса, татарса телмәр яңғырауын да йышыраҡ ишетеп ҡыуаныс кисерәм. Магазиндарға инеп, ягымлы һатыусылар менән дә үҙ телеңдә аралашыуы рәхәт: тыуған ауылыңда йөрөгәндәй булаһың. Ә бына Стәрлетамаҡта былдай хәл күҙәтелмәй, бында белгәндәре лә үҙ телендә аралашыуҙан ояла.

Эйе, Өфөгә тартылып тора күңел. Мәктәп тамамлаған йәштәр ҙә уҡырға инергә тип Өфөгә ынтылып тора. Баш ҡалабыҙ артабан да үҫһен, заманса төҫ алһын, тип теләйем. Балалар менән, ғаилә менән бергәләп ял итә, спорт менән шөғөлләнә, экскурсияларға йөрөй һәм тамаша ҡыла торған урындар күберәк булһын ине. Юғиһә, Башҡортостандан күпме ғаилә, мәктәп уҡыусылары "аквапарк" тип, ҡасандан бирле Өфө - Ҡаҙан юлын тапай! Бына беҙ ҙә әле шунда йыйынабыҙ. Матур итеп даими рәүештә ярыштар үткәрелеп торһа, "Аҡбуҙат" ипподромы, Боҙ аренаһы ниндәй популяр урындарға әүерелер ине. Әйткәндәй, хоккей буйынса ил беренселеге матчтарын ир-егеттәребеҙ Өфөгә, Боҙ һарайына барып ҡараны.

Баш ҡалабыҙҙың тышҡы йөҙөнә ҡағылышлы тағы бер кәлимә һүҙем бар. Реклама менән сыбарланмаһын ине урамдар. Бер нисә урында Аҡмулла, Рәми Ғарипов, Баязит Бикбай әҫәрҙәренән дүрт юллыҡтар, рус яҙыусыларының китап, классик әҙәбиәт хаҡындағы ҡанатлы һүҙҙәре яҙып эленгән баннерҙар бер аҙ эленеп торҙо ла, күп тә үтмәй, юҡ та булды.Ошо матур башлангысты дауам итергә кәрәк ине! Ҡала үҫешенә аныҡ файҙа килтергән уның хөрмәтле кешеләре, яҙыусылар, ғалимдар, уҡытыусылар, йә булмаһа өлгөлө, матур ғаиләләрҙең портреттары ла эленеп торһон ине күрмәлекле урындарҙа...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**




Май айында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән өс уҡыусыбыҙ - Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан **Ғәлиаслан Иҙелбаев**, Әбйәлил районы Хәмит ауылынан **Рәйлә Килдейәрова**, Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылынан **Хөмәйрә Зинурова** - "400 башҡорт халыҡ йыры", Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан **Рәмил Мәжитов**, Балаҡатай районы Айҙаҡай ауылынан **С. Мөхәмәтшина**, Салауат районы Янгантау ауылынан **Әлиә Ишбулдина** Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарына лайыҡ булды. Башҡа уҡыусыларыбыҙға "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптары ебәреләсәк.

Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәреүселәрҙе лә бүләктәр көтә: 3 кеше - башҡортса "Көрьән-Кәрим" китабына, 3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры", 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", ҡалғандар иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптарына эйә буласаҡ.

● Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почтаға йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **234 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓10 июндә - Ҡырмыҫҡалы районында, 12 июндә Өфөлә Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә 200 йыл тулыуға арналған тантаналар үтәсәк. 9 июндә Өфөнөң Конгресс-холлында үтәсәк 1812 йылдағы Ватан һуғышында Еңеүҙең 200 йыллығына арналған халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция байрам сараларының үҙәк ваҡиғаһы буласаҡ. Фәнни форум сиктәрендә БР Милли музейында "1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттар" диорамаһы асыласаҡ. 10 июндә Ҡырмыҫҡалы районының Тауһеңер ауылында "Любезники, любизар" театрлаштырылған халыҡ ижады байрамы, 1812 йылғы яуҙың тарихи реконструкцияһы һәм һабантуй үткәреләсәк.

✓Владимир Путин Рәсәй Президенты ҡарамағында Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ойоштороу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр итә РИА Новости. Уны Владимир Путин етәкләй. Совет рәйесе урынбаҫары итеп РФ Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Вячеслав Володин тәғәйенләнгән.

✓Республика Йортонда Рәсәй Иҫәп палатаһы Рәйесе Сергей Степашин менән Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов төбәк һәм контроль ведомстволары араһында хеҙмәттәшлек мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда Иҫәп палатаһы аппараты етәксеһе Сергей Шахрай, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҙгәртеп ҡороуға булышлыҡ итеү фонды генераль директоры Константин Цицин, республика министрлыҡтары һәм ведомстволары етәкселәре ҡатнашты.

✓Продукцияһының юғары сифатлы булыуын раҫлаған республиканың һигеҙ предприятиеһы етәксеһе бөгөн Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡулынан наградалар алды. Быйыл конкурсҡа күрһәтелгән 35 ҡатнашыусы араһынан иң яҡшы һигеҙ предприятие һәм ойошма һайлап алынған.

✓Өфөлә Италияның виза үҙәге асылды. Италияға туризм, эшлекле визит, белем алыу, найм буйынса эшләү, ғаиләнең берләшеүе маҡсатында, шулай уҡ транзит, транспорт визаны һәм рәсми саҡырыу буйынса виза алыуға ғариза тултырғанда ярҙам күрһәтеү уның төп бурысы иҫәпләнә. Виза үҙәге Италияның Мәскәүҙәге Генераль консуллығы менән рәсми рәүештә аккредитланған. Тулыраҡ мәғлүмәтте "Виза менеджмент сервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең сайтынан алырға мөмкин.

*КИНӘЙӘ*

# ҒӘҘЕЛЛЕККӘ...

## үҙебеҙ әҙер түгел



**Һәр кем ғәҙеллек көҫәй, әммә был ҡысҡырыныуҙарҙан ары китмәй. "Ғәҙел һайлауҙар кәрәк!" тип ҡысҡыра Болотный майҙанына митингка сығыусылар. "Рәсәй коррупция һаҙлығында бата", тип оран һала Навальный интернеттағы сайтында. "Бурҙар һәм алдаҡсылар партияһы ил менән идара итә", тип тамаҡ йырта улар артынан эйәреүселәр. "Беҙгә, фәрештәләргә ҡайҙан шундай ил, етәкселәр эләккән икән?" тип башын тота халыҡ.**

Ысынлап та, "Ғәрәп яҙы" дәүләт вертикале баҫымы аҫтында тонсоғоп барған оппозицион көстәргә илһам бирҙе. Тормоштоң бер көйө ағышына күнегеп бөткән халыҡты ҡуҙғытып ебәрҙе. Декабрҙәге һайлауҙарҙан башланып киткән ризаһыҙҙар хәрәкәте бөгөн булһа ла тынмай. 12 июндә лә улар "Миллиондар маршы" ойошторорға планлаштыра.

Оппозиция берҙәм генә күренһә лә, уны уртаҡ идея берләштермәй. Улар идара итеүсе партия һәм Президентты күрә алмауҙа ғына берҙәмдәр. "Путинһыҙ Рәсәй" тип ҡысҡырһалар ҙа, уның урынына аныҡ кандидат та тәҡдим итә алмайҙар, йәғни Путин урынында күрергә теләгән кандидаттары ла юҡ. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып сығыш яһауҙары, ысынында, исемдәрен танытырға, тағы бер пиар эшләүгә генә ҡайтып ҡала. Блоггер, тусовкалар "арыҫланбикәһенең" ҡайнар телмәрҙәренә эйәреүселәр - халыҡтың ысынбарлыҡтан айырылыусы дыуамал романтиктар өлөшө. Ошондай романтиктарҙың күп булыуы сәйәнында, маршрут транспорты туҡталышында, баҙарҙарҙа, интернет сайттарында юғары сәйәсәт тураһында фәлсәфә һатыусылар ишәйеүенә килтерә.

Матур лозунгылар күп ҡысҡырыла митингтарҙа. Бигерәк тә ғәҙеллек хаҡында лозунгылар йыш яңғырай. Ғәҙел һайлауҙар, ғәҙел етәкселәр, ғәҙел Рәсәй! Хатта оппозиция лидерҙары ошо һүҙ әйҙәүе артынан Әстерханға барып, аҙна-ун көн асығып ҡайтты. Ғәҙеллек өсөн көрәштеләр ҙә, тик беҙгә, ябай халыҡҡа, был төшөнсәне аңлатманылар. Күрәһең, һәр кеше ҡарашына һәм аңына ярашлы үҙе аңларға тейештер инде уны. Улайға китһә, оппозиция менән ҡулға-ҡул тотоношоп митингтарға сығыусы енси йүнәлеше кешесә булмаған аҙғындарҙың гомосексуализмды, бер енес вәкилдәре араһындағы никахтарҙы легаллаштыреуҙе талап итеүе лә ғәҙеллек булып сығамы?

Шулай ҙа төшкөнләлөккә бирелергә ярамайҙыр. Ғәҙеллек абстракт төшөнсә булһа ла, уның дөйөм принциптары бар. Тик тормошта ғына улар һирәк ҡулланыла. Сөнки теләгәнендә эшләү, аҙыҙына ни тура килә, шуны һөйләү, йәнең теләгәнде ҡылыу ғәҙеллек түгел. Үҙеңә ҡарата яҡшы мөнәсәбәт талап итеп, шул уҡ ваҡытта башҡаны ҡыҫырыҡлау ҙа ғәҙеллек түгел. Ғәҙеллек - ул уртаҡ, бөтәһенә лә бер үк булған ҡағиҙәләргә буйһоноу, барыһына бер тигеҙ ҡарау, башҡалар мәнфәғәте хаҡына үҙең яраткан ҡайһы бер нәмәләрҙән, ғәҙәттәрҙән баш тартыу. Енел түгел бындай ғәҙеллек ҡағиҙәләрен үтәү. Күпселек быны эшләй ҙә алмай.

Шуға күрә, "ғәҙел" һайлауҙар яҡын киләсәктә күҙалланмай. Халыҡты болартып йөрөүселәр ҙә шуны аңлаһын ине лә бит... Сөнки йәмғиәтебеҙ ҙә, үҙебеҙ ҙә быға әҙер түгел. Аҡыл эйәләре бушҡа ғына, "Халҡы ниндәй - хакимы шундай", тип әйтмәгән. Тимәк, бәләләребеҙҙең башы Америкала ла, батшаларыбыҙҙа ла түгел, бәләләребеҙ башы - үҙебеҙҙә.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

*ПАРАДОКС*

# УРАМҒА СЫҒЫУ СӘБӘБЕ

**Һәр бер коллективта, йәмғиәттә, ғаиләлә "көслө кеше" тигән вакант урын була. Тәбиғәт бушлыҡты яратмай. Шуға күрә ир, атай булған кешенең ысын мәғәнәһендә ғаилә башлығы ролен үтәй алмай башлаған сағында был ролдең ҡатын, әсәй яғына күсеүенә һис тә аптырарға ярамайҙыр. Ә инде был мәсьәләгә ил, дәүләт кимәлендә ҡарағанда...**

Эйе, тап шулай: халыҡ мәнфәғәтен яҡлар өсөн халыҡтың үҙе тарафынан ойошторолған дәүләттең үҙ вазифаһын насар йә бөтөнләй үтәй алмай башлаған ваҡытында ижтимағи ойошмалар хәрәкәте әүҙемләшә башлай. Ҡайһы илдә йә дәүләттә халыҡ хәрәкәте көслө, берҙәм төҫ алһа, был күренеш ошо дәүләт етәкселәренең эшмәкәрлек кимәлен күрһәтә лә инде. Ни өсөн тигәндә, ижтимағи хәрәкәттәр әүҙемлегенең нигеҙендә, асылда, етәкселек алып барған сәйәсәт менән ризаһыҙлыҡ сәбәбе ята. Һуңғы ваҡытта илебеҙҙә үткән һайлауҙар был хәлдең аныҡ миҫалы булып тора.

Был күренеште шул уҡ ғаилә миҫалы менән дә сағыштырырға була. Әйтәйек, ир кеше, ғаилә башлығы булараҡ, үҙенең бурыстарын үтәмәһә, өҫтәүенә, эсеп ҡайтып, ҡатынына ҡул күтәрһә, ҡатын кеше ни эшләргә мәжбүр була, тип уйлайһығыҙ? Эйе: "Кешеләр, милиция, ирем туҡмай, мине яҡлағыҙ!" - тип урамға сығып ҡысҡыра инде. Мәскәүҙең Манеж, Болотный майҙандарында, башҡа урындарында үткән митинг-пикеттарҙы ғиләләге ошондай хәл менән дә сағыштырырға була бит. Кешене бит йәшәү рәүеше менән риза булмауы урамға әйҙәй. Бындай әйҙәүҙәр власть башындағыларҙы үҙгәрергә мәжбүр итмәһә, шартлау барлыҡҡа килә. Әйткәндәй, бындай парадоксаль күренеш бер беҙҙең илдә генә күҙәтелмәй. Үкенескә ҡаршы, бар донъя халҡының үҙ хакимдары менән риза булмаған дәүерҙә йәшәйбеҙ шул...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# МИЛЛИ БАҪМАЛАР...

## ҡағыҙҙамы, интернеттамы?

**14 июндә республика журналистары Башҡортостан матбуғаты көнөн билдәләйәсәк. Бөгөнгө милли баҫмаларыбыҙ һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме, уларға ниндәй талаптар ҡуйыр инегеҙ? Түбәндә - ошо һорауҙар буйынса бер нисә кешенең фекере.**

**Рәшит ШӘКҮР, ғалим, яҙыусы:** Һуңғы йылдарҙа республика баҫмаларының һан яғынан артыуы яҡшы күренеш. Әммә күңелде ҡырған нәмәләр ҙә бар. Мәҫәлән, дөйөм республика мәнфәғәтенә хеҙмәт итә торған "Башҡортостан панорамаһы" журналының башҡортса өлөшөн ҡыҫҡартып ҡуйҙылар. Быны менән дә һис тә килешеп булмай. Сөнки ике телдә сығып килгән баҫмалар мәктәп уҡыусылары, үҙ телен камиллаштырырға теләүселәр өсөн дә бик кәрәк.

Матбуғат хеҙмәткәрҙәренең, баҫмаларға яҙышып тороусыларҙың телде дөрөҫ ҡулланыуы - даими иғтибарҙы талап иткән мәсьәлә. Туған телдә яҙышҡан күпселек журналистарыбыҙҙың һөнәри кимәле юғары тип булмай. Был йәһәттән фәһем алырлыҡ үҙ республика баҫмаларыбыҙ бар. Иң тәүҙә мин урыҫ теленда сығып килгән "Республика Башкортостан" гәзитен атар инем. Был баҫма темаһы яҡтырта белеүе, жанрҙар төрлөлөгө менән минә оҡшай. Гәзиттең авторҙары һөнәри йәһәттән бик әҙерлекле. Шул уҡ интервью алған ваҡытта улар респондентҡа төплө һорауҙар әҙерләп килә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт баҫмалары һорау бирә белеү йәһәтенән ҡалыша. Шуға ла беҙҙең гәзит-журналдарҙы интервьюлар һайыраҡ килеп сыға. Ошо кире һыҙат радио-телевидение журналистарына ла хас, тип әйтер инем. Ғөмүмән, журналистика еңел һөнәр түгел. Ул хеҙмәткәрҙән талант та, эшһөйәрлек тә талап итә. Шуға күрә матбуғатта яуаплы, тәрән фекерле хеҙмәткәрҙәр эшләгәндә генә, уның сифаты ла юғары буласаҡ.

**Рөстәм НУРЫЕВ, "Башҡорт википедияһы" администраторы:** Мин үҙем матбуғат баҫмаларын алдырмайым. Сөнки Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының тәбиғәтте, урманды һаҡлайыҡ, матбуғатты ҡағыҙһыҙ таратайыҡ, тигән өндәүен хуплайым. Әммә баҫмалар менән интернет аша даими таныш барам. Шуға күрә киң мәғлүмәт сараларына электрон гәзит-журналдарҙы таратыу мөмкинлеген арттырырға тәҡдим итер инем. Быны өсөн, мәҫәлән, электрон почтаға яҙылыуҙы ойоштороорға булыр ине. Ундай баҫмаларҙың ҡағыҙ варианттарынан иртәрәк килеп етеүе шарт. Электрон вариантҡа күсеү милли матбуғат өсөн хәүеф тыуҙырмай, киреһенсә, таралыу даирәһе киңәйер, уҡыусылар артыр ғына ине. Баҫмаларҙың үҙ сайттары бар. Әммә унда мәғлүмәт һуңлап бирелә. Әле мин шәмбелә сыҡҡан гәзитте интернет аша дүшәмбе көнөндә генә уҡый алам. Барлыҡ матбуғат хеҙмәткәрҙәренә тағы бер үтенесем бар. Зинһар, күберәк изгелек, яҡшылыҡ хаҡында һөйләп, яҙып торогоҙ әле. Йәмғиәттең насар яҡтарын ғына һөйләү халыҡты ялҡытты, билләһи!

**Рәсимә РЫҪМӨХӘМӘТОВА, ветеран-уҡытыусы:** Район гәзиттәрен дә, республика матбуғатын да алдырам. Район баҫмаларының кимәле тәү ҡарашҡа түбәнерәк булһа ла, улар халыҡҡа яҡыныраҡ. Ауыл эшселәре, ололар тураһында күп яҙыла унда. Район гәзиттәрен тап ошо халыҡсанлыҡ биҙәй. Шулай ҙа матбуғат, халыҡ тормошон сағылдырған хәлдә лә, киң йәмәғәтселектән бер аҙымға алдараҡ атларға, халыҡты уйландырырға, фекерләргә өйрәтергә тейеш. Бөгөн күптәр енелерәк, зиһенгә көсөргәнеш тыуҙырмаған матбуғатты алдыра. Матбуғат артыҡ ябайлыҡ артынан ҡыуһа, уҡыусыларының рухиәте, зауығы нисек үҫһен?!

**Мәһәҙи МОРАТОВ яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓11-12 июндә Рәсәй һәм Ҡала көндәре байрамы ваҡытында Өфөлә транспорт хәрәкәте үҙгәрәсәк. Баш ҡаланың ике төп магистралендә - Ленин урамы менән Октябрь проспектында ваҡытлыса сикләү индереләсәк. Ленин урамы ике көнгә ябыла - Вәлиди урамынан алып Киров урамына тиклем 11 июндә иртәнге 8.00-дән 12 июндә 24.00-гә тиклем транспорт йөрөмәй. Бында ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар өсөн йәйәүлеләр зонаһы ойоштороla. Октябрь проспектына килгәндә иһә, 11 июндә кисен Көньяҡ тыҡрығынан Төньяҡ тыҡрығына тиклем юл ябыласаҡ: 19.00-дән 22.00-гә тиклем бында байрам саралдарының генераль репетицияһы ойоштороласаҡ. 12 июндә ошо уҡ ара 11.00-дән 13.00-гә тиклем тантаналар үткән ваҡытта ябыласаҡ. Йәнә 22.00 - 23.00 араһында Ленин майҙанында байрам салюты бирелгәндә транспорт хәрәкәте ябылыуы ихтимал.

✓"Ижтимағи электрон гәзит" сайтындағы онлайн-конференция барышында Өфө округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, әле ҡалала биш меңләгән ихата биләмәһе иҫәплә-нә. Республика ярҙамында әле "500 ихата" программаһы тормошҡа ашырыла. 2011 йылда 500-гә яҡын ихата ремонтланһа, быйыл да шул сама төҙәкләндереләсәк. Был программаны алдағы биш-алты йылда үтәп сығыр өсөн әле средстволар, шул иҫәптән займға аҡса алыу мөмкинлеге эҙләнә. Һуңғы 15-20 йылда ихата биләмәһенә йүнәлтелгән аҡса Өфөлә 50 млн һумдан ашмаған. 2012 йылда был сумма нык артып, ярты миллиардҡа еткән.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы бюджет менән тәьмин ителеш кимәле буйынса Рәсәйҙең 15 субъекты рейтингында 11-се урында килә. Төбәк иҡтисадын тикшереү үҙәге ошондай мәғлүмәт бирә. 2011 йыл буйынса үткәрелгән тикшереү һөҙөмтәләренә ярашлы, беренсе баҫҡысты Красноярск алған, унда һәр кешегә 28,2 мең һум ҡаҙна аҡсаһы тура килә. 27 мең менән Ҡазан икенсе урында тора, өсөнсөлә Силәбе - 25,8 мең һум. Әйткәндәй, был рейтингыға индерелмәгән Мәскәү менән Санкт-Петербургта йән башына 134,8 һәм 88,6 мең һум бюджет аҡсаһы тура килә.

✓10 июндә Спорт һарайы (Зорге урамы, 41) алдында ауыл хужалығы йәрминкәһе үтә. Иртәнге 9.00 сәғәттә башланған йәрминкәлә концерт программаһы ла ҡаралған.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Ата-әсәһен юғалтҡас, балалар йортонда тәрбиәләнергә мәжбүр булған, унан һуң үҙенә эш табып, эш урынынан бүленгән дөйөм ятаҡтағы бүлмәлә йәшәгән Венер Йомағужин да, ниһайәт, фатирлы булды.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАЛАБЫҘ...
## стеланан башлана




**Ниндәй ҙә булһа ҡалаға автомобиль юлынан ингән саҡта ҡала исеме яҙылған стелаларға һәр кем иғтибар иткәне барҙыр. Ҡаланың ҡапҡаһын символлаштырған бындай стелалар Өфө тирәләй ҙә урынлаштырылған. Бөгөнгө көндә баш ҡалала ошондай һигеҙ стела бар. Оҙаҡламай уларға тағы ла икәү өҫтәләсәк.**

Яңы стелалар беҙ күреп өйрәнгәндәренән әллә ни айырылмаясаҡ - бейеклеге 10 метр тирәһе, эшләнгән материалы - ҡуйы ҡыҙыл гранит. Тик элеккеләренән айырмалы рәүештә, яңы стелаларҙың башында биш ҡырыйлы йондоҙ түгел, ә Өфө ҡалаһының гербы буласаҡ. Ҡала округы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, Октябрь районындағы стела - Ҡала көнөнә, ә Киров районындағыһы киләһе айҙың аҙағына тиклем ҡуйыласаҡ. Шулай уҡ Өфө янындағы барлыҡ стелалар эргәһендәге майҙандар тейешле тәртипкә килтереләсәк: асфальт түшәләсәк, сәскәләр ултыртыласаҡ. Ғөмүмән, стела янында фотоға төшөргә теләүселәргә... матурлыҡ мөхите булдырыласаҡ.

# ЕР АҪТЫНАН...
## юлдар булыр

**Өфө ҡала округы Советы депутаттары үҙҙәренең сираттағы ултырышында Башҡортостан Президентының БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендәге төп йүнәлештәр һәм положениеларҙы бойомға ашырыу буйынса комплекслы ҡала программаһы сараларын раҫланы.**

Программала бөтәһе 53 сара ҡаралған. Шуларға ярашлы, ҡалала яңы балалар баҡсалары төҙөлөшө темптары артасаҡ. Күп балалы һәм зәғиф балалы ғаиләләрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу маҡсатында Өфөлә был категория граждандар шәхси төҙөлөш өсөн ер участкалары менән ташламалы рәүештә тәьмин ителә башлаясаҡ. Сараларҙың бер өлөшө юлдарҙың үткәреү һәләтлеген яҡшыртыуға һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Мәҫәлән, быйыл Октябрь проспектындағы "Дан бульвары" һәм "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталыштарында ер аҫты юлдары төҙөлә башлаясаҡ. Шулай уҡ Дим районының көнсығыш өлөшөндә тимер юлдарҙы аша сығыусы юл үткәргес ҡайтанан төҙөләсәк. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа хоҡуҡи, кәңәш-мәғлүмәти һәм финанс ярҙам күрһәтеү йәһәтенән киләсәктә ҡалала бизнес-инкубатор булдырыу планлаштырыла. Шулай уҡ программала дәүләт ҡарамағында булмаған балалар баҡсаларына ҡуртымға бирелеүсе торлаҡ булмаған муниципаль объекттар һанын 25 процентҡа арттырыу ҡарала. Тәрбиәгә бала алыусы ғаиләләр институтын үҫтереү һәм балаларҙың кире ҡайтарылыу ихтималлығын сикләү өсөн Өфөлә етем балаларға, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балаларҙы һәм бала алып тәрбиәләгән ғаиләләргә комплекслы психологик-медицина-социаль, педагогик, хоҡуҡи ярҙам күрһәтеүсе дөйөм ҡала системаһы төҙөү планлаштырыла. Өфөлә "Йәш ғаилә" клубтары ойоштороласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛА САҒЫНДА БӘХЕТЛЕЛӘР -
## ғүмер буйы бәхетле

**Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө баш ҡалабыҙҙа ысын байрам төҫөн алған бихисап саралар уҙҙы. Ата-әсә наҙынан мәхрүм ҡалған, ауыр социаль шарттарға эләгеп, ҡыйырһытылған балаларға был көндө айырыуса ҙур иғтибар күрһәтергә тырышты баш ҡала һәм республика етәкселеге.**

● Ҡала мәҙәниәт һарайына йыйылған балалар йорттары тәрбиәләнеүселәрен иң беренселәрҙән булып республика Президенты Рөстәм Хәмитов тәбрикләне. Балалар менән ихлас аралашҡандан һуң, Президент уларға бәхет теләне һәм "Беҙ һеҙҙе яратабыҙ!" тип тә өҫтәп, балалар йөҙөнә йылмайыу ҡундырҙы. Артабан Рөстәм Зәки улы һәм баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы кисәге балалар йорттары тәрбиәләнеүселәренә, бөгөнгө студенттарға, хеҙмәткәрҙәргә, аспиранттарға, йәмғеһе 14 кешегә, берәр бүлмәле фатир асҡыстары тапшырҙы.

Ата-әсәһен юғалтҡас, балалар йортонда тәрбиәләнергә мәжбүр булған, унан һуң үҙенә эш табып, эш урынынан бүленгән дөйөм ятаҡтағы бүлмәлә йәшәгән Венер Йомағужин да, ниһайәт, фатирлы булды. "Был көндөң килерен түҙемһеҙләнеп көтһәм дә, ысынлап та берәй көн фатир бирерҙәренә ышаныуы ҡыйын булды. Бөгөн был турала яҡын туғандарымдан башҡа бер кем дә белмәй, үҙем дә көскә-көскә бының ысынбарлыҡ икәненә ышана башланым", - тине ул ҡыуанысын йәшермәйенсә.

● Был тантананан һуң Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов ауыр социаль шарттарҙа ҡалған балалар менән хакимиәт бинаһында осрашты. Бина буйлап ойошторолған бәләкәй экскурсиянан һуң балалар сәй өҫтәле янында ҡала башлығы менән аралашты. Ирек Ишмөхәмәт улы балаларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. Бәлиғ булмағандарҙы социаль реабилитациялау үҙәге директоры Лидия Слабова әйтеүенсә, был балалар араһында төрлө тормош һынауҙары үткәндәре лә бар. Илтифатһыҙ, бәйһеҙ йәшәү рәүеше алып барғаны өсөн ошо бәләкәй генә сабый ҡыҙҙарҙың кемеһенендер яҡындары ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән.

● Салауат Юлаев майҙанында үткәрелгән "Ҡояшлы бала саҡ ҡаласығы" тип исемләнгән театрлаштырылған тамаша ваҡытында ла балалар күңел асты. Сабыйҙар бергәләп төҫлө аҡбурҙар менән асфальтҡа төрлө һүрәттәр төшөрҙө, бейене, йырланы, төрлө уйындар уйнаны. БДУ-ның волонтерҙар үҙәгенең егет һәм ҡыҙҙары балаларға алама ғәҙәттәрҙе фашлаусы уйындар ойошторҙо. 10 йәшлек Таһир Исмәғилев исемле малай уҡ менән шешәгә атты, тәмәке бөртөктәрен, ҡул менән ҡағылмай ғына лабиринт аша өрөп, үҙенән ситкә сығарҙы, махсус бүрәнәгә төҫлө таҫмаларҙы ҡаҙаҡлап ҡағып, алама ғәҙәттәрҙән ары тороуын белдерҙе. Бөтә һынауҙарҙы ла уңышлы үткәндән һуң малай бүләккә матур шар алды. Бөтә был уйындарҙы Башҡортостан Президенты, баш ҡала округы хакимиәте башлығы һәм башҡа ҡунаҡтар тамаша ҡылды, балаларҙың шатлығын уртаҡлашты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс тамаша, өсөһө - өс төрлө йөкмәткеле, өс төрлө кисерешле... Шулай ҙа, уларҙы бит бәхеткә ынтылған, мөғжизә көтөп йәшәгән балалар берләштерә. Бала сағы бәхетле үткән кешеләр тәрбиәләйек! Сөнки бала сағы бәхетле кеше генә үҙен ғүмер буйы бәхетле итеп тоя.**

**Тамашаларҙы Илгиз ИШБУЛАТОВ күҙәтте.**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө халҡы ҡаланың тарихи үҙәгендә - Ленин, Гоголь, М.Кәрим, Чернышевский урамдарында юл хәрәкәтенең нисек ойошторолоуына бәйле үҙ теләктәрен белдерә ала. Халыҡтан һорауҙарға яуап алыу Өфө хакимиәтенең заказы буйынса ойошторола. Ул 7 июндә башланды һәм бер аҙна дауам итәсәк. Был көндәрҙә 16.00-дән 19.00-гә тиклем "Башҡортостан" ҡунаҡханаһы", "Телеүҙәк", "Авиация техникумы" йәмәғәт транспорты туҡталыштарында интервьюерҙар эшләйәсәк, улар транспорт көткән граждандарға бер яҡлы хәрәкәт схемаһын индереүгә бәйле проблемалар тураһындағы һорауҙарға яуап бирергә тәҡдим итәсәк.

✓ Өфө ҡала округы Советы өфөләләрҙең Башҡортостандың баш ҡалаһында йола буйынса 12 июндә билдәләнеүсе Ҡала көнө тураһындағы фекерҙәрен асыҡлай. Был уңайҙан социологик һорау алыу ҡала округы Советының рәсми сайтында үткәрелә. Тауыш биреүгә 12 июндән һуң йомғаҡ яһаласаҡ.

✓ Өфөлә зоопарк төҙөлөүе ихтимал. "Башҡортостан урмансылары паркы" уны урынлаштырыу өсөн иң ҡулай вариант иҫәпләнә. Әле был майҙан ташландыҡ хәлдә. Өфө округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, паркты төҙөкләндерер өсөн уны киренән ҡала милкенә ҡайтарыу буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла.

✓ Өфөнөң төҙөкләндереү менән шөғөлләнеүсе муниципаль предприятиелары паркы Т-150К маркаһындағы яңы тракторҙар менән тулыланды, улар башлыса ҡар таҙартыуҙа файҙаланыласаҡ. Белгестәрҙең мәғлүмәттәренә ярашлы, Өфөнөң коммуналь техника паркы 500-ҙән ашыу берәмектән тора. Әгәр уны дөрөҫ файҙаланһаң, был техника бөтә эштәргә лә етә. Мәҫәлән, яңы тракторҙарға арба тағып, уны йәйгеһен ҡулланырға мөмкин.

✓ Быйыл Өфөлә ун мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһын файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Өфө округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Иж-тимағи электрон гәзит" сайтындағы онлайн-конференция барышында баш ҡалала әүәлгесә балалар баҡсалары етмәүен билдәләне. Шуға күрә яңы балалар баҡсаларын төҙөү сараһы күрелә, ошоноң менән бергә тыуым аҙ булған осорҙа (уҙған быуаттың 90-сы йылдары) офис һәм башҡа коммерция күсемһеҙ милке итеп үҙгәртелгән биналарҙы кире ҡайтарыу буйынса эштәр алып барыла.

✔ ***И. Ялалов фекеренсә, юл хәрәкәте проблемаһын сисергә еңел ер өҫтө метроһы һәм метробустар ярҙам итәсәк. Проект эшләүгә генә ике йыл китәсәк һәм ул проект 2015 йылда ғәмәлгә ашырыла башлаясаҡ.***



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ ДА ИТӘ БЕЛӘБЕҘ,

## төп эште лә алып барабыҙ

**12 июнь - Рәсәй көнөндә өфөләләр Ҡала көнөн дә байрам итә. Бер үк ваҡытта баш ҡалала Салауат Юлаев көндәре лә старт ала. Был көндө Өфөлә бихисап мәҙәни һәм спорт саралары ойоштороласаҡ. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов журналистар менән осрашыуҙа ошо саралар хаҡында һөйләп үтте.**

### Йәйәү йөрөү форсаты сығып тора…

Байрам саралары, йола буйынса, Салауат Юлаев һәйкәленә һәм Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу тантанаһынан башлана. Был көндө өфөләләр 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүҙең 200 йыллығына арналған театрлаштырылған тамашаны ла ҡарай аласаҡ. Ул Ленин майҙанында 12.00 сәғәттә башлана. Тамашала Өфө, Стәрлетамаҡ, Мәскәүҙән килгән ижади коллективтар, тарихи клубтар ҡатнаша. Шул уҡ ваҡытта майҙанда көрәшселәр өсөн асыҡ беренселек ойоштороласаҡ.

Артабан байрам сараларын республиканың һәүәҫкәр һәм профессиональ ижади коллективтары дауам итәсәк. Ә 21.00 сәғәттә тамашасыларҙы үҙ сығышы менән Роберт Юлдашев һәм "Ҡурай" төркөмө ҡыуандырасаҡ.

Байрам көндәрендә ҡаланың башҡа майҙандарында һәм ял итеү урындарында ла төрлө саралар уҙа. "Кашкадан" паркында балалар һабантуйы үтәсәк. С. Аксаков исемендәге баҡсала "Йырым минең һинә, баш ҡалам!" тип аталған әҙәби-музыкаль кисә ойоштороласаҡ.

Быйылғы байрам сараларында өфөләләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын яңылыҡ көтә. Тәүге тапҡыр Ленин урамы ике көнгә - 11-12 июндә Өфө Арбатына әүереләсәк. Был көндәрҙә Зәки Вәлиди урамынан алып Киров урамына тиклем транспорт йөрөмәйәсәк.

- Ҡалаға йәйәүлеләр урамы бик кәрәк. Шуға күрә әлегә байрам ваҡытына булһа ла, ошондай урам асырға булдыҡ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Унда беҙ рәссамдарҙы, музыкантарҙы, ҡул эштәре оҫталарын саҡырабыҙ. Ғөмүмән, үҙ ижады, һәләте менән уртаҡлашырға теләүселәрҙең барыһы ла байрамды бизәй ала. Халыҡ ошо урам буйлап йөрөп, матур итеп ял итә алыр, тип уйлайым...

Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеүенсә, байрам саралары ҡала ҡаҙнаһы иҫәбенә ойоштороласаҡ. Шуға ла саралар юғары кимәлдә үтергә тейеш, әммә улар артыҡ ҡиммәтле булмаһын, тигән талап ҡуйылған.

- Аҡса сарыф итеп, байрамға Мәскәү "йондоҙ"зарын саҡырыуға ҡаршымын, - ти ҡала башлығы. - Таланты бер тингә лә баһаланмаған йырсының сәхнәлә ике сәғәт бейеп кенә кеҫәһен тултырып ҡайтып китеүенән өфөләргә бер файҙа ла юҡ. Өфө, ғөмүмән, республика үҙе талантлы сәнғәт эшмәкәрҙәренә бай. Шуға күрә ҡала көнөндә халыҡ үҙ шәхестәрен күрергә, үҙ ҡалаһын танырға тейеш...

### Юлдар киңәйтелә…

Артабан баш ҡала башлығы журналистарға ҡаланы үҫтереү, янырытыу, уның йылдар дауамында йыйыла килгән ҡайһы бер проблемаларын хәл итеү юлдары һәм саралары тураһында һөйләне. Мәҫәлән, Өфө урамдарында транспорт көндән-көн арта. Хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеү маҡсатынан йәйге осорҙа яңы көс менән урамдарҙы киңәйтеү эштәре башланды. Әле Октябрь проспекты, Цюрупа, К. Маркс, тағы ла бер нисә урамда юлдар киңәйтелә. 2012-2014 йылдарҙа юлдарҙы төҙөкләндереүгә бөтәһе 4,5 миллиард һум аҡса тотоноласаҡ. Шулай уҡ быйылдан яңы ер аҫты үткәүелдәре төҙөлә башлаясаҡ. "Был күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Өфөлә ул эшкә 30 йыл тотонғаныбыҙ юҡ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Төҙөлөш программаһына 30 ер аҫты үткәүеле ингән. Өсәүһен быйыл уҡ төҙөй башлайбыҙ. Улар Октябрь проспектындағы туҡталыштар эргәһендә буласаҡ".

### Метробустарҙа…

И. Ялалов фекеренсә, юл хәрәкәте проблемаһын сисергә заманса йәмәғәт транспорты - еңел ер өҫтө метроһы һәм метробустар ярҙам итәсәк. Проект эшләүгә генә ике йыл китәсәк һәм ул проект 2015 йылда ғәмәлгә ашырыла башлаясаҡ. Был йәһәттән Стамбул ҡалаһы тәжрибәһе өлгө итеп ҡуйыла.

- Унда халыҡ ҙур тиҙлектәге трамвайҙа, метробуста йөрөүҙе хуп күрә,- ти ҡала башлығы, - сөнки ундай транспортта бер нисә минут эсендә һис ҡаршылыҡһыҙ ҡаланың бер осонан икенсеһенә тиклем барып етергә була.

Яҡын киләсәктә иһә Өфөнөң көньяҡ һәм төньяҡ өлөштәрен трамвай юлы ялғаясаҡ. Уны Октябрь проспекты буйлап һуҙырға уйлайҙар. Әлегә төҙөлөш проекты әҙерләнә.

### Велосипедтарҙа йөрөрбөҙмө?

Шулай уҡ ҡала етәкселеге Өфөлә велосипедта йөрөүселәр өсөн юлдар төҙөргә ниәтләй. Киләһе йылдарҙа велосипедсылар өсөн 50 километрға яҡын юл һуҙыласаҡ. Схемаһы әҙер. Быйылдан уҡ Октябрь проспекты буйлап велосипедта йөрөү мөмкинлеге тыуҙырыласаҡ: тротуарҙарға махсус билдәләр һыҙып сығасаҡтар, ә бордюрҙарҙы түбәнәйтәсәктәр. Шулай уҡ быйыл Һупайлы биҫтәһенән Инорсҡа тиклем велосипед юлы төҙөлә башлаясаҡ.

### Ағастар яңыртыласаҡ

Юл буйҙарында ҡарт, сереп бөткән ағастар күп. Халыҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдереүенә ҡарамаҫтан, ундай ағастар ҡырҡыласаҡ. Сөнки ҡартайған ағастар кеше ғүмере өсөн дә хәүеф тыуҙыра. 28 апрель көндө Өфөлә - 50 ағас, 4 майҙа - 40, 1-2 июндә - 30 ағас ауған. Бындай осраҡтарҙың һәр береһе фажиғә менән тамамланыуы ихтимал. Өфөләләргә, ағастар киҫелеп бөтә, тип борсолорға урын юҡ. Һәр ҡырҡылған ағас урынына эре тоҡомло ике ағас үҫтереләсәк.

### Салауат Юлаев проспекты ниндәй булырға тейеш?

Салауат Юлаев проспектының бөгөнгө йөҙө ҡаланың үҫеш мөмкинлектәренә яуап бирмәй, тигән фекерҙә Ирек Ишмөхәмәт улы. Ысынлап та, план буйынса ул үҙәк урамға әүерелергә тейеш ине. Унда бейек йорттар, ҙур мәҙәни үҙәктәр төҙөү күҙ уңында тотолғайны. Бөгөн унда автомойкаларҙан башҡа бер ни ҙә юҡ. Проспект тәүге план буйынса бар ҡала аша үтергә тейеш булған. Ҡала етәкселеге ошо ниәтте алдағы йылдарҙа инвесторҙар ярҙамында тормошҡа ашырып, проспектты яңыртырға уйлай. "Ул саҡта Өфөнөң дә йөҙө һиҙелерлек үҙгәреп, башҡаларҙы ылыҡтырып торасаҡ", тигән фекерҙә Ирек Ишмөхәмәт улы.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Өфөләләр үҙҙәре лә, ҡунаҡтар ҙа шайләгәндәр: бөгөн Өфөлә аҙым һайын төҙөлөш майҙанына барып төртөләһең. Бер аҙ уңайһыҙлыҡтар тыуҙырылһа ла, кешеләр яңыртылып ятҡан юлдар, тротуарҙар, башҡа төҙөлөштәр эргәһенән һуҡранмай ғына үтеп китә. Сөнки улар аңлай: яңылары заманса буласаҡ. Заманса уңайлыҡтар килә Өфөбөҙгә.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТАҒЫ БЕР ЯРҘАМ

**Башҡортостандағы йәш уҡытыусылар (35 йәшкә тиклемге һәм мәктәптә бер йылдан да кәм эшләмәгән булһалар) дәүләттән 450 мең һум күләмендә ярҙам аласаҡ.**

Был сумманы йәш уҡытыусылар ипотекаға взнос итеп, йә булмаһа йорт төҙөү өсөн файҙалана ала. Был йәһәттән ҡайһы бер шарттарҙы иҫтә тотоу кәрәк. Беренсенән, дәүләт ярҙамына дәғүә итеүсе педагогтар торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булараҡ, йәшәгән урындары буйынса хакимиәттә иҫәптә торорға тейеш. Икенсенән, банк кредитын ҡайтарыу ваҡыты 10 йылдан артырға тейеш түгел. Тағы бер шарт: был ярҙам менән файҙаланған уҡытыусы биш йыл да эшләмәйенсә мәктәптән китһә, был аҡсаны кире ҡайтарыу талап ителәсәк. Матди ярҙам күрһәткәндә ауыл уҡытыусыларына өҫтөнлөк биреләсәк. Аҡсалата ярҙам бер тапҡыр бирелә.

## ЭШ ЕҢЕЛЛӘШТЕРЕЛӘ

**Башҡорт дәүләт университетында дистанциялы уҡытыу сайты ҡулланылышҡа индерелде. Система Moodle платформаһында тормошҡа ашырылған һәм әле һынау режимында эшләй. Был турала юғары уҡыу йортоноң матбуғат үҙәгендә хәбәр иттеләр.**

Әле сайтта курстар менән тулыландырыу эштәре алып барыла - был йүнәлештә БашДУ-ның Эшҡыуарлыҡ идаралығы һәм хәүефһеҙлеге институты менән математика һәм мәғлүмәт технологиялары факультеты уҡытыусылары әүҙем эш алып бара. Дистанциялы уҡытыу сайтында бер структураға һалынған уҡыу әсбаптары, лекция материалдары биреләсәк, уларҙы уҡып сыҡҡандан һуң, студент материалдарҙы нисек үҙләштергәнен баһалатыу, хатта зачет биреү өсөн тест үтә йәки өйгә эштәрҙе эшләй аласаҡ. Бынан тыш, яңы йүнәлеш уҡыу процесын семинарҙар формаһында ойоштороРға, студенттарҙың сайтҡа инеү-инмәүен күҙәтеп барырға, курсты тамамлағандан һуң эштәрҙе баһаларға, статистика алып барырға, форум һәм чаттар ярҙамында уҡытыусыларҙың студенттар менән аралашыуын тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк.

Әйткәндәй, Рәсәйҙә дистанциялы белем алыу мөмкинлеге бирелгән тиҫтәләгән вуз бар. Улар араһында М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты, Санкт-Петербург политехник университеты, Ҡаҙан дәүләт медицина академияһы, Өфө дәүләт нефть техник университеты, БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы бар.

**Эльмира САБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



### Шыршы бальзамы

Әле шыршыларҙың тубырсыҡтары йомшаҡ, һутлы. Гриптан, гайморИттан уның бальзамы файҙалы. 1 кг шыршы бөрөһөн һалҡын һыуҙа сайҡарға һәм ваҡларға. 3 литр һыуға һалып, 15 минут ҡайнатып алырға. Марля аша һөҙөргә, тондорғас, тағы һөҙөргә. 1 литр ҡайнатмаға 1 кг бал, дарыуханаларҙа һатылған прополис (шыйыҡ була) өҫтәргә, болғатырға һәм 45 градусҡа тиклем йылытырға. Һыуытҡас, шешәләргә ҡойоп ябырға ла, һыуыткыста һаҡларға. Грипп мәлендә, һалҡын тейгәндә ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 1 балғалаҡ ашарға. Гайморит та дауалана.

### Эҫе ҡан баҫымын күтәрһә…

Шулай уҡ бауыр ауыртһа, ҡан баҫымы күтәрелеп йонсотһа, 40 гр киптереп вакланған гөлйемеш тамырын 200 мг һыуға һалып, 20-30 минут ҡайнатырға, төнәтергә, һөҙөргә. 7-10 көн дауамында көнөнә 3 мәртәбә 200-әр мл эсергә, балан ҡушып ашарға ла була.

Фалиж һуҡҡанда ошо төнәтмә менән аяҡтарға ванна эшләргә кәрәк.

### Баш ауыртһа…

Эҫеләә хәл бөтөп, баш ауырта башлаһа:

❖ таҫҡа йылымыс һыу ҡойоп, аяҡтарҙы тығып ултырырға;

❖ 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ бөтнөк һалып һалған төнәтмә эсергә;

❖ баш һалҡындан ауыртһа, маңлайға һәм сикә тирәһенә ҡабығынан әрселмәгән лимонды бешереп, һутын һөртөргә кәрәк. Ошо сараларҙан һуң хәл дә инә, баш та ауыртмай.

### Гөлйемеш

Әлеге мәлдә гөлйемеш сәскә ата, уны йыйырға онотмағыҙ. Гөлйемеш сәскәһен еҫкәү йөрәк, баш мейеһе, һиҙеү ағзаларының эшмәкәрлеген яҡшырта. Сәй итеп эсергә, ҡайнатма яһарға ла була, бик шифалы

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Еңеүселәрҙең барыһына ла БР Мәғариф министрлығының маҡтау ҡағыҙҙары һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды. Төп приз - нетбук Күмертау ҡалаһынан Максим Ивановҡа тапшырылды.***



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты республикала ғына түгел, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә киң билдәле. 70 йылға яҡын тарихы булған гимназияның тәүмаҡсаты һәр уҡыусының интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтереүгә яҡшы шарттар булдырыу. Дөйөм һәм музыкаль белем биреүҙе берләштергән гимназияның директоры Эльмира Рафаил ҡыҙы САФИНА менән әңгәмәбеҙ белем усағының бөгөнгө йәшәйеше һәм киләсәккә ҡуйылған маҡсаттары хаҡында.**

# ИҢ ТЫЛСЫМЛЫ ӘМӘЛ...

## ул музыка



### Заман талаптарына яуап бирә

Гимназия Өфөнөң иң ҙур белем учреждениеларының береһе. Балаларҙа гуманизм идеялары һәм республикала йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәренең быуаттар дауамында формалашҡан мәҙәни һәм рухи ҡиммәтләренә хөрмәт тәрбиәләү беҙҙең гимназияның белем биреүҙәге һәм тәрбиә эшмәкәрлегендәге өҫтөнлөклө принцибы булып тора. Гимназияның төп үҙенсәлеге - 5-11 кластарҙа профилле уҡытыу, йәғни төп дөйөм белем алыу менән бер рәттән, һәр уҡыусы үҙенең һәләтенә һәм теләгенә ярашлы музыкаль йүнәлештә лә тәрәнәйтелгән белем ала. Бының өсөн гимназияла тынлы һәм һуҡма, халыҡ музыка ҡоралдары, шулай уҡ музыкаль-теоретик, хор менән дирижерлыҡ итеү һәм вокал, башҡорт музыка фольклоры бүлектәре уңышлы эшләй. Гимназияла музыкаль профилле белем биреүҙең төп нигеҙен тынлы музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтеү тәшкил итә. Тағы ла, һәр бала мотлаҡ рәүештә фортепианола уйнарға өйрәнә. Шулай уҡ теләге булғандар өҫтәмә музыка ҡоралында уйнауҙы үҙләштерергә һәм вокал менән шөғөлләнергә мөмкин.

Һәр уҡыусы музыка менән айырым уҡытыусы етәкселегендә индивидуаль программа буйынса шөғөлләнә. Быларҙың барыһы ла һәйбәт һөҙөмтәләргә өлгәшергә ярҙам итә. Мәҫәлән, гимназияның ғорурлығы һәм уның визит карточкаһы - 170-тән артыҡ малай һәм ҡыҙ шөғөлләнгән дүрт тынлы оркестр. Шулай уҡ баш ҡалалағы бер сара ла гимназияның барабансылар төркөмөнән һәм "Ынйы" бейеү ансамбленән тыш үтмәй. Һуңғы йылдарҙа уҡыусыларыбыҙ республика кимәлендә уҙғарылған "Шаяниум"да ла һиҙелерлек уңыштарға өлгәште. Гимназияның уҡытыу планы федераль һәм төбәк компоненттарҙан сығып төҙөлгән. Уҡытыуҙа һәм тәрбиәүи процеста төп баҫым башҡорт теленә яһала, сөнки беҙгә уҡырға килгән башҡорт балалары үҙ телендә аралашырға, ә башҡа милләт балалары ерле халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын һәм телен белергә тейеш. Ғөмүмән, Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге гимназия-интернаты - заман талаптарына яуап биргән интернат тибындағы инновацион белем биреү учреждениеһы.

### Төп байлығыбыҙ - уҡытыусылар һәм уҡыусылар

Гимназияның рухын кем билдәләй - уҡытыусымы, әллә уҡыусымы? Аныҡ ҡына әйтеүе ауыр. Бер яҡтан, беҙҙең гимназияны балалар һәм атай-әсәйҙәр нәҡ уҡытыусылар коллективының көслө булыуына ҡарап һайлай, сөнки ошондай уҡытыусылар коллективы ғына балаға тәрән, сифатлы, бөгөнгө көн талаптарына яуап бирерҙәй белем бирергә мөмкин. Икенсе яҡтан, иң яҡшы уҡытыусы ла талантлы һәм һәләтле балаларһыҙ бер нәмәгә лә өлгәшә алмай. Бөгөнгө көндә коллектив үҙ эшен яҡшы белгән, тәжрибәле, белемле һәм балаларҙы ысын күңелдән яратҡан уҡытыусылар һәм тәрбиәселәрҙән тора. Гимназия коллективы шулай уҡ республиканың күпселек юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй.

Уҡыусыларыбыҙ менән дә хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ. Гимназиянан сыҡҡан белгестәрҙең күбеһе үҙҙәрен сәнғәткә бағышлай һәм улар араһында киң билдәле музыканттар бар. Мәҫәлән, өс уҡыусыбыҙ "СССР-ҙың күренекле музыканттарының Алфавит китабы"на индерелгән. Шулай уҡ башҡа өлкәлә лә беҙҙең уҡыусылар уңышлы эшләй. Бөгөнгө көндә гимназияла белем алыусы 340 уҡыусының да һәр береһе талантлы, һәләтле һәм сағыу булыуы менән айырылып тора. Улар араһында төрлө фәндәр буйынса олимпиада, фәнни-ғилми конференциялар, спорт ярыштары еңеүселәре, ҡала, республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар дипломанттары һәм лауреаттары бар.

### Баланың талантын үҫтереү мөһим

Башҡортостаныбыҙҙың бар төбәгендә лә талантлы балалар күп, ләкин бар урында ла уларҙың һәләтен үҫтереү мөмкинлеге юҡ. Беҙҙең гимназия нәҡ ошондай балаларға гүзәл музыка, сихри моң иленә сәйәхәт итергә, оҫталыҡтарын арттырырға ярҙам итә, ошо өлкәлә профессиональ юғарылыҡҡа күтәрелеү өсөн мөмкинлектәр аса. Шуға күрә яҡын киләсәктә тормошҡа ашырыласаҡ уй-маҡсаттарыбыҙҙың төүгеһе - республиканың төрлө райондарында һәм шулай уҡ сит төбәктәрҙә йәшәүсе музыкаға һәләтле балаларҙы гимназиябыҙға уҡырға алыу өсөн имтихандар ойоштороу. Беҙ, ғәҙәттә, 5-се класҡа уҡыусылар ҡабул итәбеҙ, урындар булған осраҡта 6-11 кластарға ла уҡыусылар алабыҙ. Быйыл 22-23 июндә гимназияға ҡабул итеү имтихандары ойоштороласаҡ. Беҙгә уҡырға инергә теләүсе баланың музыкаль һәләттәре (ритм, ишетеү, интонация, музыкаль хәтер), шулай уҡ урыҫ теле һәм математиканан белеме тикшерелә. Балдар бер булған осраҡта өҫтөнлөк етем йәки тулы булмаған ғаиләләге балаларға бирелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**"Яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа, кешелеклелеккә илтеүсе иң нескә, иң тылсымлы әмәл - ул музыка", тигән В.А.Сухомлинский. Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты коллективы был хаҡиҡәтте яҡшы аңлай һәм маҡсатлы рәүештә эшмәкәрлек алып бара ла инде.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

*ЗАМАНСА*

# УТЛЫ СЫРАҠ ҺЫМАҠ...

## Республика башҡорт лицей-интернаты

**Республика башҡорт лицей-интернаты икенсе йыл рәттән 5-се, 6-сы синыф уҡыусылары араһында "Орбита" республика полиолимпиадаһы үткәрә. Ул төрлө өлкәләге эрудиттарҙы асыҡларға ярҙам итә. Ошо көндәрҙә был белем усағында полиолимпиада һөҙөмтәләрен иғлан итеп, еңеүселәр билдәләнде.**

Республика башҡорт лицей-интернатында уҡыусыларҙа фәнгә һөйөү уятыу буйынса байтаҡ саралар ойоштороло. Интеллектуаль марафондар, "Өс быуын" уйыны, йыл һайын үткәрелгән күп предметлы йәйге мәктәп, 6-сы синыф уҡыусылары араһында математика буйынса "Матлет" республика олимпиадаһы, викториналар, конкурстар кеүек инновацион белем биреү проекттарына былтырғы йылдан "Орбита" республика полиолимпиадаһы ла өҫтәлде.

- Балалар араһында, белемле, яҡшы уҡыған кешене барыһы ла хөрмәтләй, етмәһә, уларға бүләктәр ҙә бирәләр, тигән ҡараш йәшәй һәм был белем алыуға ынтылыш тәрбиәләй. Ошо йәһәттән был полиолимпиаданың әһәмиәте ифрат ҙур, - ти лицей директоры Фәнил Жәмил улы Нуриев. - Унда ҡатнашырға теләк белдереүселәрҙең күп булыуын иҫәпкә алһаҡ, тәбиғи фәндәр буйынса һәләтле балалар күп республикала, ошондай һәм башҡа саралар ярҙамында уларҙың һәр береһенә үҫергә ярҙам итергә кәрәк.

Ысынлап та, быйыл был үҙенсәлекле олимпиадала Башҡортостандың 35 район һәм ҡалаһынан 880 уҡыусы ҡатнашҡан. Улар араһынан һайлап алынған иң яҡшы 120 уҡыусы лицей базаһында ойошторолған "Орбита-2012" полиолимпиада лагерында икенсе турҙы үткән. Өс көн дауамында балалар интернатта йәшәп, ҡала буйлап сәйәхәт итә, музейҙарҙа була, ғалимдар менән таныша. Лицей уҡытыусылары полиолимпиадаға ингән дүрт йүнәлеш буйынса - математика, информатика, тәбиғи фәндәрҙән һәм инглиз теленән оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. Уҡыуҙан тыш, олимпиадала ҡатнашыусылар өсөн командала һәм айырым эшләүҙең төрлө ысулдарына өйрәтеүсе төрлө тренингтар ойоштороло. Лицейҙың директор урынбаҫары Әскәт Әхмәт улы Зарипов әйтеүенсә, был тренингтар балаларға шәхси үҫеш өсөн дә файҙалы, артабан уҡыуҙарында ла ярҙам итәсәк.



Әйткәндәй, полиолимпиадала ҡатнашҡан балалар лицейға уҡырға инергә теләк белдерһә, уларға имтихандарҙа өҫтөнлөк биреләсәк. Әлегә еңеүселәрҙең барыһына ла БР Мәғариф министрлығының маҡтау ҡағыҙҙары һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды. Төп приз - нетбук Күмертау ҡалаһынан Максим Ивановҡа тапшырылды. Бүләктәр, тигәндәй, алдынғы уҡыу йортоноң алдынғы ҡарашлы уҡытыусыларының һәр изге идеяһына матди яҡтан ярҙам күрһәтергә әҙер ойошмалар ҙа табылып тора. Был юлы балаларға ҡиммәтле бүләктәрҙе "Кламас" компьютер фирмаһы тапшырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Физика-математика фәндәре докторы, БДУ-ның теоретик физика кафедраһы профессоры, баһалама рәйесе Екомасов Евгений Григорьевич был балаларға, коллегалар, тип өндәшеп, уларҙы республика һәм Рәсәй тәбиғи фәндәренең киләсәге, тип атағайны. Бөйөк ғалим Плутарх әйтеүенсә, уҡыусы белем менән тултырыла торған һауыт түгел, ул ут тоҡандырыла торған сыраҡ. Тик был сыраҡты тоҡандырыу өсөн уҡытыусы йәки уҡыу йорто үҙе утлы сыраҡ булырға тейеш. Бөгөн Республика башҡорт лицей-интернаты был бурысты лайыҡлы башҡара.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

**✓ Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

## Быны донъя тарихы ла таный

### Намджан - сауҙагәрҙәр һәм металлургтар ҡалаһы

Үкенескә күрә, Намджан картала билдәләнмәгән. Һәм ҡайҙа урынлашыуы тураһында текста яҙылыуы буйынса ул Өфөгә тап килмәй. Әммә уның тураһындағы мәғлүмәт шуныһы менән ҡыҙыҡлы: ул Урта быуат дәүерендәге көньяҡ Урал ҡалаһының тибын һүрәтләй. Намджандың Урал йылғаһы бассейнында урынлашыуы ихтимал. Иҙриси был ҡала тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә килтерә: "Унда бик күп баҡыр табалар, уны Шаш иленең Хорезм һәм башҡа ҡалаларына һәм күрше гуздар иленә оҙаталар..." Шаш - ул Ташкент, Хорезм - Амударьяның түбәнге тамағы, гуздар хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән. Табылған баҡыр карауан юлы менән Урта Азия илдәренә ебәрелгән. Каталон атласының карталарының береһендә билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың карауан сауҙаһының бер маршруты ҡайҙалыр көнсығышҡа китә. Иҙриси был турала бына нимә тип яҙа: "...Был ҡаланан шулай уҡ йылға буйлап әл-Хәзәр диңгеҙенә төлкө һәм ҡондоҙ тиреһен сығаралар, уларҙы әл-Хәзәр диңгеҙе яры буйында һәм Дейлемда юғары хаҡҡа һаталар..." Телгә алынған әл-Хәзәр диңгеҙе - Каспий, ә Дейлем өлкәһе хәҙерге Ирандағы Каспий буйындағы Мазендаран провинцияһы. Шулай итеп, Намджан сауҙагәрҙәре Каспий диңгеҙен киҫеп сығып, уның көньяҡ ярына барып еткән. Артабан Иҙриси Намджан халҡының диңгеҙ сауҙаһы тураһында мәғлүмәттәр килтереп, уның географик урыны тураһында бер шик тә ҡалдырмай: "Был ҡалала шулай уҡ балсыҡтан яһалған әйберҙәр һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүсе, юғары сифатлы көршәктәр эшләйҙәр. Был йылға ярҙарында төрлө аҫыл таштар, лазурит, шулай уҡ был йылғала төрлө балыҡтар бар. Унда яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған ҙур балыҡтар йәшәй. Намджан ҡалаһы халҡы төрлө хәйләләр менән уларҙы еңел генә тота ала. Уларҙы күп итеп тотоп, шуның менән йәшәйҙәр, күп өлөшөн тоҙлайҙар һәм һуңынан Хазар диңгеҙенә сығасаҡ караптарына килтерәләр. Улар ошо диңгеҙҙән яр буйлап баралар һәм Итиль ҡалаһына эләгәләр, унда балыҡтарын һаталар һәм үҙҙәре лә ашайҙар..." Текстан күренеүенсә, Намджанда йәшәүселәр "башҡорттарҙан хазарҙарға" йылға юлын үҙләштерә. Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап аҫҡа судноларҙа төшкәндә улар Каспий диңгеҙенең акваторияһына сыға. Һуңынан, уның яры буйлап көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, Волганың дельтаһына барып етеп, йылға буйлап үрләп Хазарияның башҡалаһы Итиль ҡалаһына барып сығалар. Унда улар аҫыл таштар, йәнлек тиреһе һәм тоҙло бикре һата. Иҙрисиҙең тексына һәм картаһына ярашлы, Намджандың Башҡортостандың көньяҡта Эмба йылғаһы һәм Ҡаҙағстан өлкәһенең Мугоджар тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан тарихи территорияһында урынлашҡан булыуын күрәбеҙ. Был ҡаланың Яйыҡ йылғаһы баш алған Арҡайым заманынан алып баҡыр табыу эштәре алып барылған Урал тауҙары эргәһендә урынлашыуында шик булыуы мөмкин түгел. Иҙриси яҙмаларын өйрәнеүсе Ирина Коновалова Намджан ҡалаһын хәҙерге Орск районы тирәһенә урынлаштыра.

### Ҡараҡая ҡалаһы хәҙерге Өфөгә тап килә

Иҙрисиҙең картаһы буйынса, Өфөгә бигерәк тә Ҡараҡая ҡалаһы тап килә. Ул Атил, йәғни Ағиҙел йылғаһына ҡойған, уның уң яҡ ҡушылдығы Ҡариҙелде хәтерләткән урында билдәләнгән. Дөрөҫ, Өфө тип күҙалланған Ҡараҡая ҡалаһы хаталыҡ менән Ағиҙелдең уң яҡ түгел, һул яҡ ярында урынлаштырылған. Бында, әлбиттә, бер ваҡытта ла Башҡортостанда булмаған авторҙы ғәфү итергә мөмкин. Иҙриси: "Ҡараҡая - ағас өйҙәрҙән һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала, - тип яҙа. - Булғарҙар уларҙа даими баҫымсылыҡ яһап тора. Уларҙың араһы - 16 аралыҡ һәм улар араһында даими туҡтауһыҙ һуғыш бара..." Әгәр бер көнлөк аралыҡты 40 километр тип алғанда, Ҡараҡая ҡалаһы һәм булғарҙар араһы 640 километр тәшкил итә. Был Өфө менән Татарстандағы хәҙерге Булғар ҡалаһы араһына яҡын. Шулай итеп, Өфө-II археологик ҡомартҡыһы Иҙриси үҙенең яҙмаларында яҙған Ҡараҡая ҡалаһына ниндәйҙер кимәлдә тап килә, тип раҫларға мөмкин.

XIII быуатта Башҡортостан Алтын Урҙа составына инә. Мәғлүм булыуынса, монгол хандары, ҡағиҙә булараҡ, яулап алынған илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылмай, уларҙан бары тик яһаҡ түләүҙе һәм кәрәк булғанда һуғыш алып барыу өсөн ҡораллы ополчение ғына талап итә.

### Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр

Көнсығыш Европаны берҙәм дәүләткә берләштергән Алтын Урҙа дәүерендә уның территорияһы буйлап сәйәхәт итеү быға тиклем булған быуаттарға ҡарағанда киң тарала. Батый батшалығына бөтөн донъянан сауҙагәрҙәр килә, ә генуэз негоцианттары Урҙала йәнлек тиреһе һәм бик күп сауҙа фактураһы табыуға концессияға эйә була. Күрәһең, тап уларҙың мәғлүмәттәре буйынса 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу биләмәһе аныҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә. Пашкерти тағы ла анығыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркаторҙың атласы 1595 йылда автор вафат булғас донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай. XIV быуаттың ғәрәп ҡамуссыһы Ибн Халдун Алтын Урҙаны һүрәтләп, былай ти: "Үрҙә Сыңғыҙхан ошо дәүләткә нигеҙ һалыусы, уның Души-хан (Джучи) исемле улы бар һәм ул батша, тип белдерелгәйне. Был батшалыҡ төньяҡта Хорезмдан Яркенда, Соғда, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башкурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡтың сигендә Ширван ҡалалары араһында Баҡы һәм уның эргәһендә Демир Капу (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар". Нияз Мәжитов фекеренсә, атап үтелгән пассажда Башҡорт ҡалаһы, йәғни көнбайыш Европа карталарындағы Пашкерти ҡалаһы телгә алына. Урта быуаттарҙа ҡаланың этник өҫтөнлөклө халыҡ атамаһы буйынса йөрөтөлөүе ғәжәп түгел. Волга Булғарының баш ҡалаһы ул ваҡытта Булғар тип аталыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул ваҡыттағы биләр ырыуының Биләр тип аталған ҡалаһы була. Хәҙерге сыуаштарҙың ата-олаталары булған сувар ырыуының Сувар тигән ҡалаһы була. Мордва-мокшаларҙың Мокша ҡалаһы була. Н. Мәжитовтың оппоненттары сығанаҡтарҙа биләмә түгел, ә Башҡортостан тигән географик атама тураһында һүҙ бара, тип, Башҡорт ҡалаһының булыуын инҡар итә. Уларҙың кеме хаҡлы икәнен ваҡыт күрһәтер. Әммә Урта быуат Башҡортостанда ҡалаларҙың, шул уҡ Намджан ҡалаһы булыуы факты - шикһеҙ. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаямы, Башҡортмо, Түрә-таумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора. Уның сәскә атыу осоро VII-XII быуаттарға тура килә. Монгол баҫмасылығы һөҙөмтәһендә ҡала яйлап бөтә бара. Һуңғы һөжүмде уға 1389 йылда Башҡортостан буйлап ут һәм ҡылыс менән үткән Тамерлан яһай.

Һығымтала Өфө-II ҡаласығының фәнни әһәмиәте буйынса эксперт советының 2007 йылда ҡабул иткән резолюцияһынан өҙөмтәләр килтерәйек: 1) Өфө-II ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артындағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә, был факт һәйкәлде Көнсығыш Европалағы шуға оҡшаш һәйкәлдәр араһында айырып тора.

2) Ҡаҙыныу һөҙөмтәһендә асылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына ҡарай. Ҡаланың һаҡ өсөн тәғәйенләнгән диуары һәйкәл эшләгән осорҙоң иртә этабында төҙөлгән, алдан күҙалланған проект буйынса күтәрелгән һәм үҙаллы үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булыуын раҫлай.

Шулай итеп, Эксперт советы ағзалары билдәләр комплексы буйынса беҙҙең эраның IV-XV-XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтендә шикләнмәй. Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.

Эксперт советы ағзалары: Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, профессор, ТР Фәндәр академияһының баш ғилми хеҙмәткәре Ф.Ш. Хузин (Ҡаҙан); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының Урта быуат археологияһы төркөмө мөдире, профессор, тарих фәндәре докторы И. Л. Кызласов (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Сүрия археология экспедицияһының начальник урынбаҫары, тарих фәндәре докторы Ш. Н. Әмиров (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының һаҡланыусы ҡаҙылмалар бүлегенең Мәскәү эргәһе экспедицияһы начальнигы урынбаҫары, археометаллургия буйынса халыҡ-ара төркөм ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина (Мәскәү).

Эксперт советының резолюцияһына Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, академик Н. А. Макаров ҡултамғаһын һала. Йәғни илдең әйҙәүсе археологтары Өфө-II ҡаласығын донъя әһәмиәтендәге һәйкәл тип таный, ә Башҡортостандың ҡайһы бер тарихсылары - юҡ. Уларҙың ҡайһыһы шарлатан - үҙегеҙ һығымта яһағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Аҙағы. Башы 22-се һанда).**



✓ ***Ҡатын-ҡыҙҙың тәмле бешереүе өйҙәгеләр өсөн һәләкәт ул. Ирҙәрҙең йөрәгенә тура юл - уларҙың ашҡаҙаны аша, тигән фекер - хаталы. Һыйлы табын ирҙең ҡеүәтен бөтөрә, икенсенән, уны һимертә.***

# АЯҠ АҪТЫБЫҘҘА дауалаусы,

**Үләндәр менән дауаланыуға нисек ҡарайһығыҙ? Әллә борондан килгән был халыҡ дауаһы ысулына ышанып етмәйһегеҙме? Һәр хәлдә, түбәндәге сығыш үләндәр менән дауаланыуға мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәртер, был өлкәләге белемегеҙҙе бер аҙ булһа ла тулыландырыр, тип уйлайбыҙ. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - гәзитебеҙҙең әүҙем авторҙарының береһе, билдәле халыҡ табибы, Бөрйән районы уҙаманы Марат Рәжәп улы ИШМӨХӘМӘТОВ. Атты уға туғарҙыҡ.**

## Лайла: яҡшымы ул, әллә насармы?

Хәҙерге заман кешеһенең эсе тулы лайла булыуын күптәр белеп тә бөтмәйҙер. Күҙ алдына килтерегеҙ: кеше түңәрәкләнә бара, түңәрәкләнә бара, ә беҙҙә ундайҙарҙы "таҙарып киткән" тип маҡтап ебәрәләр. Әммә был хәл һаулыҡҡа етерлек иғтибар итмәүҙән барлыҡҡа килә. Хәҙерге медицинала ла был күренешкә әллә иғтибар итмәйҙәр. Ә бит үҙ заманында Гален, Әмирдәүләт, Гиппократтар лайланың ниндәй ауырыуҙарға килтереүе, унан нисек дауаланыу тураһында яҙып ҡалдырған. Эске ағзаларҙың лайла менән көпләнеүе матдәләр алмашыныуының насарайыуына килтерә. Ҡағиҙә булараҡ, лайла барлыҡҡа килдеме, ашҡаҙан насар эшләй башлай. Беҙ үҙебеҙ ҙә күберәк лайла барлыҡҡа килтерә торған ризыҡтарға: ит, сыр, дөгө, шәрбәт, аҡ икмәккә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Был ризыҡтар менән туҡланабыҙ икән, беҙ мотлаҡ рәүештә уларға ҡушып, йәшел ризыҡтар ашарға тейешбеҙ. Боронғолар ете көн рәттән балтырған, кесерткән үләндәренән бешерелгән аштар, шулай уҡ ҡаты ризыҡтар менән тәғәмләнеүҙе файҙалы һанаған. Еҫле балтырған, мәҫәлән, ҡан әйләнешен яҡшырта, лайланы бөтөрә, бик туҡлыҡлы ла үҙе. Унда С витамины ла, майҙар ҙа, башҡа төрлө файҙалы микроэлементтар ҙа күп. Ғөмүмән, иртә яҙҙан сыҡҡан үләндәр, ғәҙәттә, файҙалы элементтарға бик бай була.

## Баҡсала үҫә ул дарыуҙар

Беҙҙең баҡсабыҙ тулып кесерткән үҫә. Ә беҙ уның файҙаһы тураһында уйлап та бирмәйбеҙ. Үҙендә иң күп цинк туплаған үлән - ул кесерткән. Организмда цинк етерлек кимәлдә булһа, ул кешелә диабет сире булмаясаҡ. Кесерткәндән ҡала бәпембәгә иғтибар итегеҙ. Көнөнә ете бәпембә көпшәһе ашап йөрөһәгеҙ, диабет барлыҡҡа килеү ҡурҡынысын юҡ итеп, организмығыҙҙы инсулин менән тәьмин иттегеҙ, тигән һүҙ.

Женьшень үләне онтағынан организмға файҙалы төнәтмә эшләүҙәре барыбыҙға ла мәғлүм һәм беҙ уны файҙаланабыҙ. Ә бына үҙебеҙҙең аяҡ аҫтында үҫкән тай тояғы (копытень) тигән үләндең ошондай уҡ дауалау үҙенсәлектәренә эйә икәнен белеп етмәйбеҙ. Уның тамырын онтап, шул көйө генә ҡабып ебәрһәң дә ул һиңә көс бирәсәк.

Айыу ҡурайының көпшәһе ағыулы, ә бына тажын бешереп, салат итеп, ә тамырын сей көйөнсә ашаһаң, ул һинең ашҡаҙаныңды таҙарта. Шулай уҡ дегәнәк тамыры ла шифалы. Әммә уны бешереп ашарға ярамай - 60 градустан юғары температурала уның барлыҡ файҙалы матдәләре юҡҡа сыға.

Һыйырҙың йә башҡа йорт хайуанының холецистит, панкреатит менән ауырығанын ишеткәнегеҙ бармы? Юҡтыр, сөнки улар үлән менән генә туҡланып йәшәй һәм бындай сирҙәр улар өсөн ят нәмә. Ә ниңә беҙ, кешеләр, ауырыйбыҙ? Сөнки беҙ тәбиғәттән айырылғанбыҙ. Беҙ ҙә үлән ашап йәшәргә яратылғанбыҙ икәнен онотҡанбыҙ. Беҙҙең эсәктәр ике метр самаһы оҙонлоҡта, һәм улар үлән ашаған саҡта ғына яҡшы эшләй. Ә бына айыуҙың эсәктәре ҡыҫҡараҡ, сөнки ул ит менән туҡланыу өсөн яратылған. Әммә айыуҙың айыуы яҙ көнө "айыу ҡурайы" көпшәһенең тамырын ашап, ашҡаҙанын таҙарта белә.

## "Был тағы үлән ашаны..."

Күп осраҡта үт ҡыуығы, ашҡаҙан аҫты биҙе тулы ҡеүәтенә эшләй алмай. Бының сәбәбе - беҙ ашаған продукттарҙа. Беҙ яртылаш әҙер, эшкәртеүгә еңел булған, шунлыҡтан ашҡаҙанға әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай торған шәрбәтле, онталған ризыҡтарҙы, фәнни тел менән әйткәндә, хилусты ашап өйрәнгәнбеҙ. Бындай төр ризыҡты эшкәртер өсөн үт ҡыуығының, крипсиндарҙың һәм хатта бауыр бүлеп сығарған энзимдарҙың да әллә ни кәрәге теймәй. Хилус кешенең ферменттар бүлеп сығарыусы аш һеңдереү ағзаларын эшкә екмәй генә һеңдерелергә "ынтыла". Сөнки уның үҙендә ферменттар, витаминдар кәрәкле миҡдарҙа тупланған була. Был осраҡта ферменттар бүлеп сығарыусы биҙҙәргә эш тә ҡалмай, тиерлек. Яҙа-йоҙа эшләй бындай саҡта беҙҙең биҙҙәр.

Ә хәҙер икенсе хәл тураһында һөйләп үтмәксемен. Беҙ ашарға яраҡлы үләнде ҡабып йоттоҡ, ти. Үләндәге файҙалы элементтарҙы тарҡатыр өсөн бауыр - энзимдарын, ашҡаҙан аҫты биҙе - аш һеңдереү һутын бүлә, һәм әлеге беҙ ашаған үләнде эшкәртеү процесы ауыҙ ҡыуышлығында уҡ башлана. Йәғни, беҙҙең тән, хәләнән килгәнсе, һәр аҙыҡтан файҙалы матдәләр алып ҡалырға тырыша. Әйткәндәй, Азия илдәренең кухняһына иғтибар иткәнегеҙ бармы? Улар ниндәй генә ризыҡ ашаһалар ҙа, иң тәүҙә йәшел салат ҡаба. Һиндостанда, Ҡытайҙа, Корея ла һәм Япония ла ашты йәшел ризыҡһыҙ ашамайҙар.

Баҡсала үҫкән ашарға яраҡлы ҡый үләндәрен кемдең былай ғына ашағыһы килһен? Әлбиттә, бер кемдең дә... Еҫле балтырғанды ла, кесерткәнде лә шул килеш ашау бик үк ҡәнәғәтлек килтермәгән һымаҡ. Әйҙәгеҙ, эске ағзаларыбыҙҙы тере йән эйәләре итеп күҙ алдына килтерәйек әле. Әгәр беҙ көн һайын кесерткән, балтырған, бәпембә кеүек үләндәрҙе ашай башлаһаҡ, ағзаларыбыҙ тырышып- тырышып эшкә керешәсәк. Ә үҙҙәре бер-береһенә: "Әйҙә, яҡшыраҡ эшләйек, был алйот тағы ла тәмһеҙ, ҡаты үлән ашаны бит, ҡотола һалайыҡ был йөктән", - тийәсәк.

## Үләндәр балаһыҙлыктан да ҡотҡара

Эйе, алдағы мәҡәләбеҙҙең береһендә был хәл тураһында яҙғайныҡ инде. Шулай ҙа был ғибрәтле хәлде тағы бер тапҡыр ҡабатлағы килә: бер ҡатын "Ир-ат күңеленә иң яҡын юл - уның ашҡаҙаны аша", тигән ҡанатлы һүҙҙе күҙ уңында тотоп, тәмле бешерергә тырыша. Күп тә үтмәй, ире һимерә башлай, һөҙөмтәлә, вафат була. Ире үлгәндән һуң ул тағы кейәүгә сыға. Бындай хәл уның икенсе һәм өсөнсө ире менән да ҡабатлана... Һөҙөмтәлә, ҡатын өс ирҙән тороп ҡалған байлыҡҡа эйә була. Ҡатын-ҡыҙҙың тәмле бешереүе өйҙәгеләр өсөн һәләкәт ул. Ирҙәрҙең йөрәгенә тура юл - уларҙың ашҡаҙаны аша, тигән фекер - хаталы. Беренсенән, һыйлы табын ирҙең ҡеүәтен бөтөрә, икенсенән, уны һимертә. Бешерә белмәгән ҡатын-ҡыҙҙың иренең ҡеүәте көслө була.

Ирҙәрҙең ҡорһағы ҡайышынан аша төштөмө, ундайҙарҙа аденома сире бар һәм уларҙың эсе тулы таҫмалы таш, тигән һүҙ. Мин тағы ла лайла ҡурҡынысын һыҙыҡ өҫтөнә алам. Лайла йыйылһа, организм үҙе үк унан ҡотолорға теләй: кешене уҡшыта башлай. Шул ваҡыт тоҙға төртөп, бер киҫәк икмәк ашап ебәрһәң, стимулятор булған тоҙ ярҙамында аш һеңдереү системаһы әлеге массаны эшкәртә һала. Ә бындай хәл бүтән ҡабатланмаһын тиһәгеҙ, ашҡаҙанығыҙҙың дүрттән бер өлөшөндә - ябай аҙыҡ, тағы ла дүрттән бер өлөшөндә - йәшел ризыҡтар, тағы ла бер өлөшөндә һыу булһын, ә бер өлөшөнөң буш ҡалыуы яҡшыраҡ.

Ир үҙен - ысын ир, ә ҡатын-ҡыҙ - ысын ҡатын булараҡ тойһон өсөн ни эшләргә? Ҡатын-ҡыҙҙарға мәтрүшкә сәйе, ҡаҙ үләне (гусиная лапчатка) төнәтмәләре эсергә кәңәш итер инем. Шуны эсһәләр, барлыҡ кәрәкмәгән матдәләр юҡҡа сыға, мәтрүшкә экстрагенды әүҙемләштергәнгә күрә, ҡатын-ҡыҙ тағы ла һөйкөмлөрәк булып ҡала. Ирҙәргә кейәү үләне (чабрец, тимьян) эсергә кәрәк. Ирҙәр көсөн нығытырға боланут та (иван-чай) ярҙам итә. Шулай уҡ ирҙәргә лә, ҡатын-ҡыҙҙарға ла бәпембә тамыры онтағы бик файҙалы.

Бөгөнгө йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты балаға уҙа алмай яфалана. Улар күремдәре юғалыуға зарлана, ә сәбәбе - лайла менән ҡапланып, аналыҡҡа юл бикләнеүе. Беренсел һәм икенсел балаһыҙлыҡ шул рәүешле барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ эстроген гормонын әүҙемләштерә торған клевер, бәпкә үләне, әнис, аҡ сәскә (ромашка), үләндәре төнәтмәһен эсһә, үҙенә массаж эшләй белһә, был проблема хәл ителәсәк.



***Ҡағиҙә булараҡ, лайла барлыҡҡа килдеме, ашҡаҙан насар эшләй башлай. Беҙ үҙебеҙ ҙә күберәк лайла барлыҡҡа килтерә торған ризыҡтарға: ит, сыр, дөгө, шәрбәт, аҡ икмәккә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Был ризыҡтар менән туҡланабыҙ икән, беҙ мотлаҡ рәүештә уларға ҡушып, йәшел ризыҡтар ашарға тейешбеҙ. Боронғолар ете көн рәттән балтырған, кесерткән үләндәренән бешерелгән аштар, шулай уҡ ҡаты ризыҡтар менән тәғәмләнеүҙе файҙалы һанаған. Еҫле балтырған, мәҫәлән, ҡан әйләнешен яҡшырта, лайланы бөтөрә, бик туҡлыҡлы ла үҙе. Унда С витамины ла, майҙар ҙа, башҡа төрлө файҙалы микроэлементтар ҙа күп. Ғөмүмән, иртә яҙҙан сыҡҡан үләндәр, ғәҙәттә, файҙалы элементтарға бик бай була.***

## Хәрәкәттә - бәрәкәт!

Туҡланыуыбыҙға иғтибар итәйек әле бер аҙға ғына. Күҙҙән сыға яҙғансы ашайбыҙ: хас та иртәгә һуғыш башланырға тора һәм оҙайлы аслыҡ яҡынлаша! Ашап ҡалырға тырышыу - беҙҙең йәнебеҙ хәтерендә, аҫҡы аңыбыҙға тупланған мәғлүмәт менән бәйле. "Магазинда бар саҡта, алып, ашап ҡалырға кәрәк", тигән кеүек ҡыланабыҙ беҙ. Һимереүҙең төп сәбәбе - лайлалы ризыҡ ашауҙан булһа, икенсеһе - йән хәтеренән, өсөнсөһө - стрестан.

Лайланан нисек ҡотолорға икәнен асыҡлап киттек. Икенсе сәбәп - һуғыш сығыу ихтималлығынан шөрләүсе, шунлыҡтан, оҙайлы аслыҡтарға дусар булыуҙан ҡурҡыусы беҙҙең аҫҡы аңды тынысландыра белергә кәрәк. Бының өсөн бары тик донъялар имен тороуына, илебеҙ менән аҡыллы кешеләр идара итеүенә рәхмәт әйтергә кәрәк.

Өсөнсө сәбәп - стресҡа килгәндә, Рәсәйҙә 72 процент халыҡ кисерә уны. Стрестан ҡотолоуҙың иң еңел юлы ниндәй? Ашау, әлбиттә. Бөгөн

✓ *Әгәр ҙә кеше хәрәкәтен сикләй икән, уның йөрәге ҡанды бар тән буйлап ҡыуа алмай башлай. Йөрәк арығас, аяҡ тамырҙары ла бүртә. Ә кешенең аяҡтары күп хәрәкәтләнә икән, тимәк, улар йөрәккә ярҙамға килә.*

# ҒЫНА...
## терелтеүсе дауа

мөхәббәттән ҡәнәғәтлек кисереү тигән нәмә бөтөнләй юҡ. Туйғансы ашаның да, ҡәнәғәтлек кисерҙең. Шуға ла бөгөнгө йәштәребеҙ араһында артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар һаны арта бара. Ниндәй ризыҡ ашауға иғибар биреп еткермәү, аҙ хәрәкәтләнеү һәм спорт менән шөғөлләнмәү бөгөнгө йәштәребеҙҙе тәү ҡарашҡа түңәрәк, матур, әммә көсһөҙ итә. Күптәр аяҡтарындағы вена тамырҙарының бүртеүенә борсола һәм бында ата-әсәләренән күскән нәҫел үҙенсәлектәрен һылтау итеп ала. Дөрөҫ түгел: бар ғәйеп - кешенең үҙендә, дөрөҫөрәге, уның аҙ хәрәкәтләнеүендә. Әгәр ҙә кеше хәрәкәтен сикләй икән, уның йөрәге ҡанды бар тән буйлап ҡыуа алмай башлай. Йөрәк арығас, аяҡ тамырҙары ла бүртә. Ә кешенең аяҡтары күп хәрәкәтләнә икән, тимәк, улар йөрәккә ярҙамға килә.

### Паразиттар...

Ҡайһы бер кешеләрҙең эсәктәрендә әллә күпме паразиттар йәшәй. Улар унда 30-40 йыл буйы ла йәшәүе мөмкин. Ә ниңә улар тураһында бер ни ҙә белмәйбеҙ һуң беҙ? Сөнки улар эсәктәрҙә барлыҡҡа килгән ҡомаҡ аҫтында йәшеренә, шуға ла табиптар уларҙы күрә һалып бармай. Әйтергә кәрәк, ул паразиттар шул тиклем төрлө-төрлө һәм күмәктәр, берҙәмлек аҡылына эйәләр. Ҡырмыҫҡалар һымаҡ: ҡырмыҫҡалар бергә саҡта сәғәт һымаҡ тип-тигеҙ, дөп-дөрөҫ, хатта "уйлап" эшләйҙәр, йәшәйҙәр, әгәр ҙә уларҙың араһынан берәүһен алып, яңғыҙ ҡалдырһаң, уның аҡылы бары 7 минут самаһы ваҡытҡа етә, артабан ул "башын юғалта". Шуның һымаҡ, бергә саҡтарында паразиттар ҙа кешеләр менән идара итә: "Һин бына был тортты ашап ҡуй, шәрбәтләп сәй эс", - тип әйтәләр кеүек. Әлбиттә, кеше үҙе был ҡорттар барлығы тураһында бер ни ҙә белмәй һәм ул ҡорттарға кәрәкле, улар өсөн уңайлы булған аҙыҡтарҙы ашап йәшәй бирә.

Шундай ҡорттары булған кешеләрҙе үлән эсереп, һауыҡтырғаным булды. Паразиттарға ҡаршы рецепт төҙөнөм. Бындай дауаланыу курсы үтеүселәр билдәләүенсә, паразиттар уларҙың күҙ төптәренән дә, тиреләренән дә килеп сыға. Ни өсөн? Сөнки, был рецептта ҡулланылған үләндәр шул тиклем әсе, уларҙы ҡорттар бөтөнләй үҙ итмәй, хатта ҡурҡа һәм кешенең аҙығы менән туҡланыуҙы ҡыҙыҡ тип тапмай, үҙенә сығырға урын эҙләй башлай.

### Биологик ҡушылма ашар алдынан уйла...

Әллә ҡайҙарҙан биологик ҡушылмалар алып ашайбыҙ. Биологик ҡушылмаларҙы бик абруйлы фирмалар етештергәнлектән, микроэлементтарҙың идеаль рәүештә үлсәнеп, кешегә күпме кәрәк, шунынса һалыныуы арҡаһында ғына уларға ышанырға була. Әммә бында бер әтнәкәне онотороға ярамай: әҙер биологик ҡушылмаларҙы ашап өйрәнһәк, тиҙҙән беҙҙең организмыбыҙ файҙалы элементтарҙы аҙыҡтан айырып ала, эшкәртә алмай башлаясаҡ. Ул үҙенә кәрәкле витаминдарҙы әлеге лә баяғы препараттар ярҙамында ғына тулыландыра ла, вәссәләм. Шулай итеп, беҙ үҙебеҙҙең бөтә булған аш һеңдереү системабыҙҙы эшлектән сығарабыҙ.

Ярай, космонавтарға бындай дарыуҙар юҡтың көнөнән кәрәкле, файҙалы булыуы шикһеҙ. Ә беҙ, ябай кешеләр, ерҙә йәшәйбеҙ, беҙҙең аяғыбыҙ аҫтында витаминдар - үләндәр үҫеп ултыра. Биологик ҡушылмалар ҡулланыусыларға кире ҡайтайыҡ: берҙән-бер көндө өс ай буйы ошо препараттарҙы ашаған кеше ҡапыл дауаланыу курсын өҙҙө икән, ти, унда туҡталыу (отмена) синдромы барлыҡҡа киләсәк. Араҡы эсеүҙән арыған, миктәгән кеше был алама ҡылығынан нисек ыҙалап, этләнеп ҡотолһа, биологик ҡатнашмалар менән төҙөлгән дуҫлыҡ та шундай уҡ ауыр шарттарҙа өҙөлә.



### Үлән йыйыу тәртибе

Кеше ҡышҡы осорҙан, витаминдар, микроэлементтар етешмәгәнлектән, көсһөҙләнеп, хәлһеҙләнеп, ауырып килеп сыға. Шул мәл ер аҫтынан шифалы үләндәр ҡалҡып сыға башлай. Был үләндәрҙе күреп, өҙөп алып, үҙенә кәрәклеһен ҡабул итеп өлгөр генә! Ә шулай ҙа уларҙы ла самаһын һәм рәтен белеп кенә йыйырға кәңәш итер инем. Миңә үлән йыйырға яратыусылар күп осрай. Улар, ғәҙәттә, үҙҙәренә кәрәкле үләнде бик күп итеп, ҡосаҡ-ҡосаҡ менән йыя. Улай ярамай. Үләндәрҙе яландың төрлө мөйөшөнән аҙ-аҙлап ҡына, ҡомһороҡлоҡ менән шөғөлләнмәй генә йыйып, бәләкәй генә услам менән алып ҡайтырға, киптерергә кәрәк. Шунан үләндең йыйып алынған ваҡыты, уның төрө тураһындағы мәғлүмәтте төргәгенә яҙып, туҙан инмәй торған бер һауытҡа һалырға кәрәк. Бөгөн ауылда ла һауа әллә ни таҙа түгел: бысраҡ осоп тора. Ә төргәккә мәғлүмәт яҙып ҡыҫтырыу нимәһе менән уңайлы? Ғәҙәттә, кипкән үлән үҙенең үҫеп ултырған сағындағы рәүешен юғалтып, танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Тағы ла, бер төрлө үләнде саманан тыш күп йыйырға ярамай. Барыбер иҫкерә ул. Йыяһығыҙ икән, сама белеп, үләндәрҙе тәләфләмәҫкә тырышырға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр шифалы үләндәрҙе ҡосаҡ-ҡосаҡ итеп алып ҡайтып, ахыр сиктә, ҡосағы менән сығарып ырғыта.

Тағы ла, үлән менән дауаланыу мәсьәләһендә лә сама тигән бик мөһим нәмәне онотторға ярамай. Әгәр дөрөҫ миҡдарҙа ҡулланмаһаң, ниндәй генә файҙалы дарыу үләне булмаһын, улар һинең һаулығыңа зыян килтерергә лә мөмкин. Шуға күрә, зинһар өсөн, дарыу үләндәренән төнәтмәләрҙе үҙ белдегегеҙ менән эшләп, эсеп ҡуймағыҙ - белгестәр менән кәңәшләшегеҙ. Мин үҙемде Рим Әхмәдовтың, Михаил Гордеевтың уҡыусыһы, тип һанайым. Рим Әхмәдовтың үләндәр менән дауалау темаһына бик һаҡ ҡарауы оҡшай.

### "Андыҙ барҙа ат үлмәҫ, ирәүән барҙа ир үлмәҫ..."

Ниндәй үләнде ҡайһы ауырыуға ҡаршы ҡулланырға кәрәк? Әйҙәгеҙ, иғтибар менән шул турала һөйләшәйек. Ҡыш буйына эсеп, дауаланып сығыр өсөн үләндәрҙе тәүҙән үк айырып һалыу яҡшы булыр. Әремдән башлайыҡ. Был - бик әсе үлән. Ә барлыҡ әсе үләндәр - улар ниндәйҙер кимәлдә ағыулы һәм эсәктәр өсөн файҙалы. Мәҫәлән, бауыр эшмәкәрлеген көсәйтеү өсөн үт ҡыуығын да әүҙемләштерергә кәрәк, бының өсөн әремдән тыш һары үләндәр - һары мәтрүшкә, пижма, йә календула ҡулайлы. Күп кенә ауырыуҙарға ҡаршы тора алырлыҡ икеприй, үләндәрҙең ҡеүәтен арттыра торған татлы тамыр (солодка), диабетҡа ҡаршы эт табан (манжетка) кеүек үләндәрҙең барыһынан да берәр ус алып, төргәккә төрөп ҡуйығыҙ.

Икенсе төргәккә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан файҙа бирә торған үләндәр төрөп киптерергә була. Йөрәкте көслө тотор өсөн андыҙ эсергә кәрәк. Әбүғалисина ла үҙ заманында кешенең йөрәген нығытыр өсөн андыҙ тамырынан да көслөрәк, файҙалыраҡ дарыу булмауы тураһында яҙған. Ул йәнә, төндә бәҙрәфкә йыш йөрөп яфаланыусылар өсөн дә андыҙ тамырынан да яҡшыраҡ нәмә юҡ, тигән.

"Андыҙ барҙа ат үлмәҫ, ирәүән барҙа - ир үлмәҫ", ти беҙҙең халыҡ. Ул был һүҙҙәрҙе буштан-буш ҡына сығармаған: йылҡы малы ауырып китеп, уға андыҙ төнәтмәһе эсерһәң, ул шунда уҡ йүнәлә лә китә. Ә ирәүәнгә килгәндә, ул бик туҡлыҡлы, ҙур, әскелтем ашамлыҡ. Уны ашаһаң, былай ҙа туйҙыра. Тағы ла, ундағы С витамины ла файҙалы тәьҫир итә. Ғөмүмән, С витаминын беҙ көнөнә 800 миллиграм ашап торорға тейешбеҙ, табиптар шулай кәңәш итә. Беҙ ул тиклем витаминды бер ваҡытта ла ашамайбыҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Шуға күрә, ирәүән ашау ҙа иммунитет өсөн бик файҙалы.

### "Юлсы, беҙҙең еребеҙҙе бысратма..."

Башҡортостанда йәшәгән халыҡты шундай матур тәбиғәт уратып алған: миңә бик күп илдәр гиҙергә, сүллектәрҙә, тау-ташлы илдәрҙә булырға тура килде. Шундай илдәрҙә, мәҫәлән, таҙартҡыстар аша үткәреп кенә һыу эсәләр. Ер өҫтөнән кәрәсин, көкөрт һәм водород ҡатнаш һыу ағып ятҡанын күрергә лә тура килгеләне. Беҙ йәшәгән мөхит - иҫ китмәле шифалы үләндәргә бай. Дарыу артынан бер ҡайҙа ситкә йөрөргә кәрәкмәй - барыһы ла баҡсабыҙҙа ҡый үләндәре һымаҡ үҫеп ултыра. Тик беҙ был байлығыбыҙҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ, тәбиғәтте тәләфләйбеҙ, бысратабыҙ, сүпләйбеҙ. Ҡайһылыр бер район биләмәһендә "Юлсы, зинһар беҙҙең еребеҙҙе бысратма!" тигән яҙыуҙы күреп, тәндәрем земберҙәп киткәйне. Ошо яҙыуҙы уҡыған кемдең сүбен ташлап китергә намыҫы етһен. Исмаһам, ошондай яҙыуҙар ҡуйып сығырға кәрәк юл, урман ситтәренә...

*Башҡортостанда йәшәгән халыҡты шундай матур тәбиғәт уратып алған: миңә бик күп илдәр гиҙергә, сүллектәрҙә, тау-ташлы илдәрҙә булырға тура килде. Шундай илдәрҙә, мәҫәлән, таҙартҡыстар аша үткәреп кенә һыу эсәләр. Беҙ йәшәгән мөхит - иҫ китмәле шифалы үләндәргә бай. Дарыу артынан бер ҡайҙа ситкә йөрөргә кәрәкмәй - барыһы ла баҡсабыҙҙа ҡый үләндәре һымаҡ үҫеп ултыра. Тик беҙ был байлығыбыҙҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ, тәбиғәтте тәләфләйбеҙ, бысратабыҙ, сүпләйбеҙ. Ҡайһылыр бер район биләмәһендә "Юлсы, зинһар беҙҙең еребеҙҙе бысратма!" тигән яҙыуҙы күреп, тәндәрем земберҙәп киткәйне. Ошо яҙыуҙы уҡыған кемдең сүбен ташлап китергә намыҫы етһен. Исмаһам, ошондай яҙыуҙар ҡуйып сығырға кәрәк юл, урман ситтәренә...*

### Йомғаҡлап...

Күренекле халыҡ табибы, "Советы народной медицины" исемле китап авторы Марат Рәжәп улы менән һөйләшеүҙә беҙ башлыса "Үләндәрҙе нисек ҡулланырға?" тигән һорауға түгел, ә "Ни өсөн үләндәрҙе йыйырға кәрәк?" тигән һорауға яуап эҙләнек. Шуға күрә, был мәғлүмәттәрҙе ғәмәли ҡулланма итеп түгел, ә үләндәр менән ҡыҙыҡһынып китеүгә этәргес көс һәм һаулыҡ, сәләмәтлек тураһындағы уйланыуҙар булараҡ ҡына ҡабул итеүегеҙҙе һорайбыҙ. Бәлки, беҙҙең бөгөнгө һөйләшеүҙән һуң кемдәрҙер урамында үҫеп ултырған билдәһеҙ үләнгә иғтибар итер. Шул уҡ ваҡытта үләндәр менән дауаланырға йыйыныусы тәүҙә медицина хеҙмәткәренә, йә тәжрибәле үлән белгесенә мөрәжәғәт итергә тейешлеген дә онотмаһын. Сөнки кемгәлер бер үләндәр дарыу булһа, кемдәләр аллергия реакцияһы килтереп, ағыу булыуы мөмкин. Йәғни, үләндәрҙең тәьҫир көсө лә һәр кемдең үҙенсәлегенә бәйле.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

✓ **Ғәлиә һөйләшеү темаһын үҙгәртә һалып, иң яҡшы һаҡланыу сараһы һөжүм икәнлеген яҡшы белгәнгә, күп тапҡырҙар сәйнәгәнен яңыртты. Яңылышманы, был юлы ла ире тиҙ ипкә килде.**




Хәйҙәр ТАПАҠОВ



# ТУЙ ДАУАМ ИТӘ

Хикәйә

Хәмитовтар ауылда абруйлы, хәлле ғаиләләрҙән иҫәпләнә. Уларҙың уртансы ҡыҙы Эмилия май байрамдарына ҡолғалай буйлы, нәҙек муйынға ултырған сөрәкә башлы, һаламдай таралып төшкән һары сәсле, аҡһыл ҡаштары аҫтына боҫҡан сәгер күҙле, ас яңаҡлы оҙонса биттәрен һипкелдәй сәселеп ҡыҙыл сәбертке ҡаплаған егетте эйәртеп алып ҡайтҡайны. Тикмәгә булмаған ҡушарлап йөрөүҙәре, һөйләшеп-килешеп, туйҙы йәй уртаһына билдәләгәндәр. Был турала үҙ кибетендә һатыу иткән Ғәлиә буласаҡ ҡоҙаларын оҙатҡандың икенсе көнөндә үк ингәнсыҡҡанға шаштырып һөйләп торҙо:

- Эмилия бәпесем ырыҫы, өлөшө менән тыуған, төшөр урыны тап-таман, уларға ҡала үҙәгендәге евроремонт үткәрелгән, ҡаралтыһы урынлаштырылған ике бүлмәле фатир әллә ҡасан уҡ әҙерләп ҡуйылған. Хәҙер ул, законная городская булып, ҡаланың өсөнсө ҡатынан үткәнһүткәндең түбәһенә төкөрөп кенә көн итәсәк, үәт! Иван Васильевич ҡоҙа үҙе ҙур урындарҙа эшләп хөрмәт ҡаҙанған түрә, хөкүмәт кешеләре менән типә-тиң итеп һөйләшә, аралашып эшләй, ҡатышып йәшәй. Мария Петровна ҡоҙағыйыбыҙға килгәндә, ул - дамахәзәйкә. Бәй, абышҡаһының эш хаҡы тауыҡ та сүпләп бөтөрә алмаҫлыҡ сәселеп ятҡанда, нәмәҫтәкәйгә уға бил бөгөргә? Кейәүкәйебеҙ ҙә күрер күҙгә итәғәтле, тыйнаҡ, бер ҙә генә ҡала ышпанаһына оҡшамаған. Иван Васильевич унынын-быныһын өйрәтеп, гелән эргәһендә генә йөрөтә, ти, бөтә сетерекле эштәрҙе уға ҡуша, йәнәһе лә. Тимәк, бер көн килеп, ҡоҙабыҙ пенсияға сыҡҡас, кейәүебеҙ шул ултырғысты биләүе бик тә ихтимал. Кейәүебеҙ ҡыҙыбыҙҙы ысынлап яраталыр, тоғро эттәй күҙҙәренә генә ҡарап тилмерә...

Аҡса иҫәпләргә күнеккән етеҙ бармаҡтар телефон йөҙөндәге һандар өҫтөнән йүгерҙе:

- Анжела ҡыҙым, привет! Хәлдәрегеҙ нисек, арыумы? Балалар уҡыу йылы ҡасан ғына бөтә, тип күҙҙәре тоналыр инде. Бындағылар менән генә әүеш-тәүеш иттек, ниңә ҡайтманығыҙ запойға? Кейәүҙе ебәрмәһәләр, һин бит үҙеңә үҙең хужа. Нишләп ҡабаландыҡмы? Һуң үткәндә кинәйәләп тумбытҡайным да, төшөнмәнеңме ни, эш бит ҙурға китеп бара, көҙгә ҡалдырһаҡ, туй мәлендә эйәген кәпәйгән ҡорһағына терәп ултырһынмы, ыстырамы ни тора... Ярай, Эмилияға артыҡ үпкә юҡ, егеттең аҡсалыһын ауыҙлыҡламаҡсы, шуныһы арыу... Атайыңмы? Йөрөй ҡушҡанды ташып... Ҡартәсәйең ята ергә һеңешкән өйөн еҫләндереп, етмешен урталаны, дөмөкмәй ҙә, исмаһам. Шул ихатаны йәмһеҙләгән харабаны бульдозер менән эттереп кенә ырғытыр инем, хәлемдән килмәй. Табын ҡыҙған мәлдә түшәктә ятҡан еренән тороп, туңҡаңлап инеп килә был, йәштәргә әйтер теләгем бар, фатиха бирәм, тисе, битһеҙ! Иҫе инәле-сығалы ҡарсыҡ үҙебеҙсәләп ебәрмәһенме! "Что за Баба-Яга?" тип, ҡунаҡтар киткән аптырашып, атайың ни, ултыра әпсәһенең әйткәндәрен баш ҡағып йөпләп, миңә килеп тороп уңайһыҙ... Шулайыраҡ булып бөттө беҙҙә. Туй көнөн йәй уртаһына билдәләнек... Һеҙ ҙә йыйына башлағыҙ ныҡлап, хәлле ҡоҙалар, елле ҡунаҡтар алдында оятҡа ҡалыу юҡ! Эйе, мин дә ҡалала ресторанда үткәрәйекме икән, тип алдан ыжығайным атайыңа, ул, йыуаштан йыуан сыға, тигәндәй, ҡайһы саҡ сығынсы аттан былайыраҡ бит, туйҙы атай нигеҙендә үткәрәмдән ары китмәне... Ярай, яҙғанын шул өйөбөҙҙә күрербеҙ... Эйе, табынға хәллерәктәрҙе йыйырға иҫәп. Һеҙ бирешмәҫһегеҙ ҙә ул, үҙең коммерсант, кейәү ГАИ-ла... Минекеләр үҙемә оҡшап әрһеҙ, талымһыҙ, ә бына ҡайным мәрхүмдәр яғы гел ярлы-ябаға. Ултырырҙар шунда мәсхәрәгә ҡалдырып. Белмәйем, атайың ни тиер, уға ҡалһа, саҡырабыҙҙан һалдырыр инде... Туйға өс йәшник араҡы һеҙҙән, өсәүһен үҙебеҙ хәстәрләрбеҙ... Нишләп, тисе, теге халыҡ бит араҡыға бешкән, йөҙгәнсе эсмәһә, күңелдәре булмай. Әйҙә, мас булып тығынһындар... Эйе, арыуҙан, дозаторлыһынан ҡарап ал, бындағы, мин һатҡан самопал, суррогат бармай... Йәнә конвертҡа һалырҙы алдан ҡайғыртығыҙ, ҡабатлап әйтәм, тегеләрҙән кәм булмаһын, штубы!

Ҡыҙы Эмилияға шылтыратты:

- Һаумы, ни хәл, ҡыҙым?

- Ничего, мам... - тине теге остағы тауыш.

- Нимә унда ҡаласа бытылдайһың?

- Андрей рядом... - булды яуап.

- Ҡыҙым, кейәүҙең паспорты ҡайҙа?

- Зачем он тебе?

- Бер ҙә зачем түгел, эҫе мәлендә алып, үҙеңдекенә ҡушып апҡайтып, силсәүиткә тапшырып ҡуй. Һеҙҙә бит ауылда загсҡа яҙалар, шуға паспорттарҙың бында, сейфта бикле ятыуы зарур!

- Успеется...

- Арҡыры-торҡоро һөйләмә, йәме, эсең һыртыңа сыҡҡан килеш һемәйеп, ярыҡ ялғаш алдында ҡалһаң, терһәгеңде тешләргә үрелерһең дә, һуң булыр. Йәнә ҡоҙа фатир әҙерләнем, ти ине, алдан хәстәрләп, пропискаға инеү яйын ҡара, яҙылып ҡалһаң, һинең рөхсәтһеҙ кире төшөрә алмаҫтар. Шулай закунлаштырһаң, айырылыша ҡалған хәлдә лә, фатир ҡап урталай бүленә!

- Уңайһыҙ, әсәй...

- Уңайһыҙланыу, әҙәп, кисәге көн төшөнсәһе, шуны маңлайыңа киртеп ҡуй, замана башҡа, заң башҡа хәҙер. Һин бит ҡатын-ҡыҙ, яйла, майла, хәйләлә, кәрәкле ерҙә балауыҙ һығып алһаң да килешер, әммә һәр ваҡыт үҙеңдең яғыңды ҡайыр. Ир-ат, тәртәгә егелеп ауыҙлыҡланған ат ише, бисәләренән үтеп, бер ҡайҙа ла бармай ул!

- Ладно, мам... - Ҡыҫҡа гудоктар ишетелеп, бәйләнеш өҙөлдө.

Төшкә тиклем кибеткә тиҫтәгә яҡын кеше һуғылды, башлыса ошо аҙна башында пенсияларын алған пенсионерҙар ҙа эскегә хирес ир-ат. Ауылда ошоноң ишеләр генә ҡалды хәҙер, йүнсел йәштәр, тормоштарын үҙгәртергә һәләтлеләр әллә ҡасан инәһеҙ ҡалып туҙыраған ҡорт күсе ише сит яҡтарға таралып бөттө. Хәмитовтарға ошолары ла еткән: көнкүреш тауарҙарын, өҫтәлгә ҡуйыр наҡыҫ аҙыҡ-түлекте, йәнә баш төҙәтерлек һыра-араҡыһын ташып өлгөртһәләр, шөкөр, яраған. Ошо эште тиҫтә йыл самаһы дауам иттереп, аҡса, бол төйнәштереп алырҙар ҙа, юллы, йәшәү шарттары ҡулайлыраҡ ергә шылырҙар. Ә бөтөүгә барған Сабир ауылының яҙмышы күптән хәл ителгән.

Ғәлиә ҡайтып, төшкө ашын үҙе генә ҡапҡыланы ла, кире түң башындағы элекке рабкооп магазинында урынлашҡан кибетенә ашыҡты. Ишек алдындағы иҫке йортта көн күргән бейеменең хәлен белергә лә ваҡыт тапманы. Ә ул ихатала күренмәне, һуңғы мәлдә ауырыҡһынып, йыш ятаҡлай шул. Ире ҡайтып инеп, малтыуарҙы ҡаршылап япҡандан һуң, киске аш янында хәбәр ҡуҙғатты:

- Көнөн билдәләнек тә ул, кемдәргә өндәшәбеҙ? - Өҙә-йырта һөйләүенән тойомлай, Ғилман шыпа ла көйһөҙ. Бына ул сынаяҡ аҫтына ҡойған сәйен ашыҡмай ғына һемереп ҡуйҙы ла, яҫы ҡаштарын төйөрөп, ситкә ҡараны. - Төш мәлендә әсәйҙең хәлен белеп сыҡһаңсы, йылдай оҙон көндә ауыҙы кибеп ятыуы еңелме?

- Атаҡ-атаҡ, бер баҫаһы урынға ике баҫып йүгермәләүемде беләгүрә бәйләнәсе. Төш мәлендә эштә инем, әпсәндең ауыҙы кибеп ятһа, мин бүре башын ашар сиктә ас торҙом. - Ул бирән ҡорһағын көслөк менән эскә тартты. - Ауырыһа ни, духтыр түгелмен, ҡайһылай итәйем, запой мәлендә Разифаны бороп индереп ҡараттым да, ҡартлығы еткән, мөҙөргән, тигән диагноз ҡуйҙы.

- Бәлки, уны район больницаһына апарып тикшертергәлер?

- Эйе, тикшерҙеләр ти тикшермәй ҙә, хәҙер врачтар хөкүмәттең яңы күрһәтмәһе нигеҙендә етмеште үткәндәрҙе бөтөнләй ҡабул итмәй, ти, беҙҙәге йәшәү оҙайлығы алтмыштан да уҙмай бөгөнгө көндә. Ә әпсәң...

- Бейем, тиң!

- Һүҙҙән йөй эҙләмә, йәме, бейемдең ул сикте уҙғанына ни ғүмер...

- Кемгә күпме йәшәү бирелгәнлеген бер кем дә алдан билдәләп ҡуймаған...

- Күпме тыҡыйым, йортобоҙ янына кибет һалып алайыҡ, тип, ҡолағыңа ла элмәйһең, исмаһам, тауарҙарыбыҙға күҙ-ҡолаҡ булыр инек. Усаҡлыҡ ҙурлығындағы бураны күтәреү өсөн ҙур сығым да, оҙаҡ ваҡыт та кәрәкмәй, теләк кенә булһын. - Ғәлиә һөйләшеү темаһын үҙгәртә һалып, иң яҡшы һаҡланыу сараһы һөжүм икәнлеген яҡшы белгәнгә, күп тапҡырҙар сәйнәгәнен яңыртты. Яңылышманы, был юлы ла ире тиҙ ипкә килде:

- Туйҙы нишләп йәйге сеςлә осорона билдәләнегеҙ, борон ундай изге ғәмәлде уңыш йыйып алып, мал ҡураға ингәс үткәрә торғайнылар, ти, әсәйем, - тине ул.

- Хоҙай Тәғәләнең бөтә көндәре лә изге, һәм уларҙың һәммәһе лә кеше сәбәп ҡылып көн итһен өсөн тәғәйенләнгән, ти Шәрифйән мулла.

- Нимә белә ул һинең мулла тигәнең, элекке ата атеист һәм совхоз осорондағы бүлексәнең алыштырғыһыҙ парторгы.

- Унан башҡа гонаһһыҙҙы йыйын әтрәгәләмдәр араһынан, бар, табып ҡара! Исмаһам, был Ҡөрьән тәржемәһен ижекләп булһа ла уҡып, йола атҡара, бөтөнләй динһеҙ йөрөгән һымаҡ түгел.

Ғилман төп хәстәргә күсте:

- Кемдәргә өндәшәбеҙ, тигәндәй, Анжелика ҡыҙым менән Джон кейәүҙән башлайыҡ, шунан Себер яғында көн иткән Уйылдан ҡустылар, малайҙары Альберт менән Артур... - Ғәлиә, ризалашҡандай, ҡыҫҡа, һимеҙ бармаҡтарын бөгә бара. - Шунан атай мәрхүмдең ағаһы Ғиндулла, улы Рәхимйән ағай менән Разифа апайҙар...

Һуңғыларҙы ишеткән Ғәлиә йомған бармаҡтарын тарбайтып, ҡорт саҡҡандай һикереп китте:

- Уларҙы саҡырып, нимәләрен алмаҡсыһың?

- Мин уларҙың бер нимәһен дә алырға йыйынмайым!

- Килеүен килгәс, йәштәрҙе бүләкләмәй ҡалмайҙар бит инде, батмусҡа ямаулыҡтарын һалһындармы?

- Туй мөлкәт йыйыу сараһы түгел, унда ҡотлап, теләктәр әйтеү өсөн киләләр!

- Иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр, бушты һөйләмә, йәме, тәүге тапҡыр килен төшөрөп, ҡыҙ бирмәйбеҙ. Һуң өйләнешкәндәр ғаилә ҡороуҙарының иртәгеһенә нисек тә йәшәп китергә тейеш бит әле.

- Һуң беҙ йәшәп алып киттек түгелме? Онотмаһаң, туйға бер һыйыр ҙа ике бәрән төштө. Ҡалғанын үҙебеҙ йыйҙыҡ, үҙебеҙ хәстәрләнек.

- Йәшәп алып киттең шул, миңә тап килгәсең. Анау күрше ауылда уҡытып йөрөгән Фәрзәнәгә өйләнһәң, икенсерәк һайрар инең. Үткәндә район үҙәгендә осраттым уны, кейгәне тотош прастуйҙан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тиҡый бит әле, мине күрмәмешкә һалыша.

- Эйе, тап иттем шул, тап иттерҙең...

- Нимә, һинең аяҡ-ҡулдарыңды бәйләп, сараһыҙламаным, үҙең алдан әйенселәп, эште боҙмаҫ кәрәк ине!

- Бейә кешәнәмәһә, айғыр яҡынлай һалып бармай...

- Хәләл бисәһен бейәгә тиңләргә нисек теле әйләнә бының. - Апаруҡ өндәшмәй тымпайһа ла, Ғәлиәнең үҙенең теле лә башҡа алыпһатарҙарҙыҡы ише йомшаҡтан, ипленән түгел, шуға үпкәһен тиҙ үк онотоп, биш былтыр элек булып үткән ваҡиғаларға күсте. - Әгәр иҫәпләшеүгә китһә, еленләгән, быҙауларға етешкән һыйыр минең яҡтан төштө, ә һинекеләр бүләк иткән бәрәндәр ҡыҫыр һәм ҡорсаңғы инеләр. Өйләнешеүебеҙгә бер йыл тигәндә, еҙнәйем биргән ағастан йорт бөтөрөп индек. Ҡалымға нимә һалдың әле? Әсәй мәрхүмә менән миңә сатин күлдәклек тә ҡытай яулығы, атайым мәрхүмгә теүәтәй ҙә калуш! Әллә мин өндәшмәй йөрөгәс тә, хәтере ҡыҫҡа бының, тип уйлайһыңмы!

- Еҙнәйеңә килгәндә, ярты урманды һатып эсеп төңкәйҙе, ниңә быларын да өҫтәмәйһең?

- Мәрхүмдең ҡәберен ҡуҙытып бисәкәйләнмә берүк!

- Давай, етте! - Ҡулын ҡылыс һымаҡ һелтәп, һауаны ҡыйған Ғилман яндырай ҡалҡынып урынынан тороп китте лә, асыҡ ишек тупһаһына барып ялпашты, алдына көл һауытын ҡуйып, тәмәке тоҡандырып, төтөн ауалатып апаруҡ һүҙһеҙ шымтайҙы.

Ғәлиә лә тырҫ-мырҫ итеп, сағыу тауышландырып, ҡашығаяҡ йыйыштырырға тотондо ла, бәхәсте дауам итергә саҡырып, дорфа ҡыҙыҡһынды:

- Төтөнөңә ҡарлыҡтыңмы әллә, ниңә өндәшмәйһең?

- Һине тыңлай башлаһаң, ҡарлығырһың да, - Ғилман тәмәкеһен һауытҡа тызып һүндереп, башын ишек яңағына терәне. - Ғиндулла олатайҙан, уның улы һәм ҡыҙынан башҡа был ауылда яҡындарҙан тағы кем бар? Йомош төшһә, шуларға барабыҙ.

- Йомош, тимә, кәңәш, тигән. Улар бирерҙән алда иң тәүҙә ас беттәй һине таларҙар әле. Ғиндулла ҡарттың бер аяғы түрҙә, икенсеһе гүрҙә, Рәхимйән урман алып шуны ҡырҡып, бура бурап һатып ғаиләһен аҫырай, Разифа медпунктта тиндәр өсөн бил бөгә. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, рәтле туғандарың юҡ һинең.

- Әләйһә, әйҙә, район үҙәгенән бар алыпһатарҙарыңды йыйып, туй үткәрәйек, Ғәлиә...

-Кибет асҡансы ғына мин Ғәлиә инем, хәҙер күптәр Ғәлиә Сәләхетдиновна, тип кенә ебәрә, тимәк, ихтирам итәләр, авторитет ҡаҙанғанмын, ә ул буштан ғына килмәй. Эш яйға һалынғас, туйып һикерә башланың, Ғилман, ашаған сеүәтәңә төкөрәһең. Әгәр мин һаман да яғылмаған клубта завклуб вазифаһында бил бөкһәм, ә һин мөғәллимлегеңә барып, һаман да үҙеңдең дә, балаларҙың да башын шул хисаплауҙарың менән ҡатырһаң, әллә ҡасан ярлыға таянып дөмөгөр инек!

- Һиңә һүҙ әрәм иткәнсе! - Ғилман шарт та шорт баҫып сығып китте.

**(Дауамы бар).**

КЕМ БАЛАҺЫ, ТИЕП ҺОРАРҘАР

**Татарстандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы Абрек Әмир улы Абыҙгилдин 1937 йылдың 8 мартында Баймаҡ ҡалаһында тыуған. Ул ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар көнөндә тыуған ир-егеттәргә тиҫтерҙәре көлөп ҡарай торғайны. Шуға күрә әсәһе уны, 1 мартта тыуҙы, тип яҙҙыра.**

# АЗАТЛЫҠ РУХЫН ИЛТЕҮСЕ...

## Абрек Абыҙгилдин шәхесенә бер ҡараш



### Тамырҙары

Абрек донъяға Баймаҡ кешеһе булып танылһа ла, тамырҙары уның башҡа тарафтарҙан: атаһы Әмир Дәүләкән районының Йәнбәк, әсәһе Йәмилә Ырымбур өлкәһенең Бәләкәй Юлдаш ауылынан. "Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр" китабында әсәһе Йәмилә Әбитаеваның да яҙмаһы бар: "...1930 йылда ағайым Зәкәриә Әбитаев мине Ырымбурға уҡ яныңа алды. Ә 1931 йыл Өфөгә күсеп килдек. Дауыт Юлтый ағай беҙгә ваҡытлыса ҙур бер бүлмәһен биреп ҡуйҙы. 1934 йылда Һәҙиә апайҙар Баймаҡ районы Йылайыр игенселек совхозында йәшәйҙәр ине. Мине йәйге каникулға ҡунаҡҡа саҡырып хат яҙҙы. Бында "һыҡылдап" һөйләшкән саф Ирәндек башҡорттарын күреп ҡайтырһың, тигәйне хат аҙағында..."

Яҙмыш Йәмиләне Баймаҡҡа ҡунаҡ итеп түгел, ә 1936 йылда Өфөлә театр техникумын тамамлағас, артист итеп эшкә ебәрә. Унан саҡ ҡына алдараҡ театр техникумын тамамлап килгән йәш артист Әмир Абыҙгилдин режиссер булып эшләп йөрөгән була. Шулай итеп, ижади яҙмыш ике йәш йөрәкте Баймаҡта осраштыра, ҡауыштыра. Уларҙың мөхәббәт емеше булып Абрек тыуа. Оҙаҡламай һуғыш башлана. "Әмирҙе фронтҡа оҙатҡанда 4 йәшлек кенә Абрек атаһының иңенә һыйынып, үҙе менән һуғышҡа алып китеүен үтенде. Әммә алып китмәйәсәген тамам аңлағас, уйынсыҡ ағас мылтығын ҡысып тотоп, атаһын илап оҙатып тороп ҡалды", тип иҫләй шул йылдарҙы уның әсәһе Йәмилә.

Абректың рәссамлыҡ һәләте мәктәптә, һуңынан Сибайҙа техникумда уҡығанда рәсем дәрестәрендә асыла башлай. Абрек үҫкән саҡта шахтер һөнәре абруйлы ине. Алдынғы шахтер Стахановтың каска кейеп төшкән һыны, күмергә буялған йөҙө, ялтырап торған тештәре һәм күҙҙәре һүрәтләнгән плакаттар саҡырыуы беҙҙең осор ир балаларының күңеленә нык һеңде. Беҙ ул саҡта уҡырға һәм йән аямай эшләргә тырыштыҡ. Беҙгә әсәй-әләсәйҙәр "Тырыш, балам, ыстаханис бул!" тип теләк теләйҙәр ине. Ни өсөн был хаҡта иҫкә алам һуң? Был турала Абрек хәтергә төшөрҙө лә, шулай тип өҫтәп ҡуйҙы: "Хәҙер беҙҙең арала ыстаханысы хәрәкәте юҡ, бөттө, уның ҡарауы "Ыстакансы" хәрәкәте өҫтөнлөк ала башланы..." Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тиҙәр бындай осраҡта.

### Фантастик реалист

Абрек Абыҙгилдиндың юбилей көндәре етә башлағас, уның хаҡындағы китапты уҡып сыҡтым. Ысынлап та, уның һәр бер эшендә нурлы буяуҙар гөлләмәһе, кешелекте сикһеҙ яратыуы, ихтирамлылыҡ тойғолары, философик фекер һыҙаттары һиҙелә. Мәҫәлән, уның яҡташыбыҙ, бөйөк бейеүсе Рудольф Нуриевҡа бағышланған һүрәте "Азатлыҡҡа һикереү" тип атала. Әммә унда рухи азатлыкты әхлаҡи азатлыҡ менән бутап, "Ғазаплыҡҡа һикермәгеҙ" тигән өндәмә-иҫкәртеү ҙә һалынған. Ә уның "Йылдар, кешеләр, дәүер" һүрәтен ҡараһаң, үҙеңде лә шул дәүергә инеп киткәндәй хис итәһең. Ни өсөн тигәндә, рәссам сихри буяу нурҙары аша һүрәтенә йәм һәм йән генә биреп ҡалмаған, ә шул дәүерҙең һулышын да һеңдерә алған.

Абрек Абыҙгилдин хаҡында ғалимдар йыш ҡына "донъяны гәҙәти ҡабул итеү стандарттарын емереүсе фантастик реалист рәссам" тигән билдәләмә ҡуллана. Әйткәндәй, уның бындай һыҙаттары ҡайҙан килә һуң? Был һорауға яуапты беҙ рәссамдың тормош юлы һәм ижады хаҡындағы китапта сәнғәт белгесе Р.Г. Шаһиева әйткән һүҙҙәрҙә табабыҙ. Уның ижадсы булараҡ әһәмиәтен сәнғәт белгесе түбәндәгесә билдәләй: "Мәктәптә һәм техникумда уҡыған йылдарында буласаҡ рәссамға Уралдың бөтә шахталарында ла эшләргә, рудниктарҙа күмер соҡорға, бокситтар сығарырға тура килә. Шул саҡта Урал тәбиғәте һәм уның данлыҡлы тарихы уға бик ҙур йоғонто яһай. Бигерәк тә Баймаҡтан 5 саҡрымда урынлашҡан данлыҡлы Семеновск руднигында эшләгәндә был йоғонто көслө була. Ә ул саҡтағы офоктто ялмап алыусы һаҙағай балҡыуы үҙе генә ни тора! Ә Арҡайым! Буласаҡ рәссамға ул саҡта ер ҡатламдары тәрәнлеге лә, дала ла, тауҙарҙың сихри тартыу көсө лә берҙәй үк яҡын була. Ул ошонда тәүге тапҡыр күңел балҡышы кисерә һәм ғүмерлек сыныҡыу мәктәбе үтә, ҡеүәт, характер ныҡлығы, бөтә тормошона етерлек көс ала. Уралтауҙың бар күркәмлеген, ғорурлығын, далалар иркенлеген һәм боронғо оҙон көйҙәрҙең ауазын үҙенә һеңдереп, Абрек Абыҙгилдин Татарстан мәҙәниәтенә, һынлы сәнғәтенә бығаса бер ҡасан да күрелмәгән азатлыҡ рухын, ижади ҡеүәтте һәм яңырыу энергияһын алып килә..."

### Ни өсөн?

Ошо ерҙә урынлы һорау тыуа. Ә ни өсөн ошондай рух йөрөтөүсе рәссам үҙенең тыуған республикаһында туған халҡына хеҙмәт итмәй һуң? Ижади яҡтан ҡарағанда, сәнғәт бер ниндәй сиктәрҙә лә белмәй, уның бөйөклөгө лә шул ҡөҙрәтенән килә. Был һорауға яуап табыр өсөн Абрек Абыҙгилдиндың биографияһына күҙ һалайыҡ.

Мәскәүҙең Суриков исемендәге художество институтын тамамлағас, Абрек ҡулына йүнәлтмә тотоп, ҙур ижади пландар менән Башҡортостанға ҡайта. Әммә ул ваҡытта башҡорт милли ижади интеллигенцияһына ҡараштың ниндәй булғанын беҙ бик яҡшы беләбеҙ. Абректы Өфө бик һалҡын ҡаршылай. Мин шул саҡта уның йәш рәссам Рәшит Имашев менән һөйләшеүенең шаһиты булдым. "Беҙгә бында эшләргә лә, йәшәргә лә бирмәйәсәктәр. Әйҙә, Ҡазанға китәйек тә, быларға үҙебеҙҙең нимәгә һәләтле булыуыбыҙҙы иҫбат итәйек. Унда беҙҙе саҡырып торалар. Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит..." тигәйне шул саҡта Рәшит Имашев. Әлбиттә, улар Ҡазанға китеп, үҙҙәре өсөн дөрөҫ эшләне, уның ҡарауы, башҡорт һынлы сәнғәте бынамын тигән ике рәссамын юғалтты. Ундағы етәксеәр был ике башҡорт егетенә ижади үҫергә ярҙам итте. Рәссам өсөн иң кәрәклеһе булған оҫтахана һәм йәшәргә фатир бирҙеләр. Уларҙың таланты юғалып ҡалманы.

Һуң, уларҙың замандашы булған Әхмәт Лотфуллин үҙебеҙҙә тороп ҡалған һәм үҙенә юл ярап алған бит, тип әйтер берәү. Дөғүрөгеҙ хаҡ, Әхмәт Лотфуллин барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы нығышмал фиҙаҡәрлеге, ҡаратырыш ихтыяры менән йырып сыға ала. Ундайҙар талантлы кешеләр араһында меңгә берәү генә...

**Салауат МОСТАФИН.**

ЗАУЫҠ

*РИФ МИФТАХОВ*

# ҺӘР МИЛЛӘТТЕҢ БУЛА БЕЙЕКЛЕГЕ,

## Һәр милләттә йәшәй - бөйөклөк!

### Атлы башҡорт

Арымаған әле арғымағым,
Хыял-маҡсат - алға юл ярыу.
Юҡ, ярамай беҙгә офоҡтарҙың
Алланғанын күрмәй юғалыу.

Ейәндәрем - татлы еләктәрем,
Сәскәләргә яңы тумалған.
Уларҙы ла алып сыҡҡым килә
Ил өҫтөнә яткан томандан.

Етеҙ елер улар толпарҙары,
Ҡитғаларҙан осор ҡитғаға.
Тик нишләрҙәр, йөрәк-күңелдәргә
Ҡанат ҡуйыр толпар туктаһа.

Күпме халыҡ килер быуындарға
Һаҡлап ҡалған ерен, ләғәтен.
Техник үҫеш, ҡорос тояҡ менән,
Тапамаҫмы илдәр милләтен?

Халыҡ бит түгел тауар-хаҡтар,
Һәр милләттең бар үҙ баһаһы.
Улар ҡиммәттәрен һаҡлар-яҡлар
Телен белгән ата балаһы.

Ер шарыбыҙ дөйөм булғанда ла,
Булмай милләт, телгә дөйөмләк.
Һәр милләттең була бейеклеге,
Һәр милләттә йәшәй - бөйөклөк!

Тәбиғәтҡә баҡһаң, иҫең китер:
Ҡош-ҡорт, йәнлек - күпме тереклек.
Ә милләттәр - биҙәктәргә биҙәк:
Тел, йыр, ауаз - затлы төрлөлөк.

Арғымағым - йән толпарым, йырым,
Юҡ, ярамай беҙгә арырға!
Атлы башҡорт, аҡыл аты менеп,
Бер йән булып тейеш сабырға!

### Халыҡ көсө

Дәүер инен терәр ир-егеттәр киткәс,
Үткән заманалар кире ҡайта.
Дәүер түгел, бары әҙәм ирке менән
Өр-яңынан тағы ҡабатлана...
Тукта, ҡәләм, ярһып ҡабаланма,
Кисәге көн бөгөнгә булыр баһа.
Әҙәм заты, заман үҙгәртәм, тип,
Асылдарын белмәй хаталана...
Бар баһалар алда - шуны аңла:
Халыҡ көсө, үҙ тарихын яҙып,
Килер көнгә үҙен баһалауҙа!

* * *

О, замана, нисек үҙгәрттең һин
Йолаларҙы, гәҙәт-ҡылыҡтарҙы.
Яҙғы һыуҙай өҫкә күтәрҙең бит
Серек-боҙоҡтарҙы, буп-буш ҡыуыҡтарҙы.

Ышанамын: бары ағып китер,
Ҡайтыр бер саҡ тормош ярҙарына...
Сабыр аҡыллылар сафҡа баҫһын,
Заман мохтаж улар ярҙамына.

### Иң ҙур гонаһ

*(Балаһын табырға теләмәгән ҡатынға хат)*

Йәшәр өсөн Хоҙай бүләк иткән
Балаҡайҙың өҙһәң ғүмерен,
Ниндәй шатлыҡ табып йыуаныуҙан
Бәхет йыйып йәшәр күңелең?

Батма, зинһар, сабый гонаһына,
Аҡ юлыңа ул бит сәләмең.
Йөрәгә һәм ҡулы бергә була
Бала табып һөйгән әсәнен.

Ә кем белә, бәлки, тыуыр балаң
Бөйөк ғалим, даһи, шағирҙыр?
Күкрәк һөтөң имеп үҫкән балаң
Асыш яһар, йондоҙ ҡабыҙыр...

Ғүмеремде өҙмә, әсәй, тиеп
Әйтә алмаҫ сабый йәнендә.
Тик барыбер ҡалған үмер буйы
Һыҙландырып ятыр йәнеңдә.

### Инаныу

Хаҡ булһа ла яҙғандарым
Мәшһүрлек ҡаҙанманым.
Сөнки төрлө түрәләрҙең
Табанын яламаным -
Бер кемгә ялланманым.
Выжданым булды дәрәжәм,
Иманым - аҡыл-аңым...
Төшөрмәгән башҡорт данын:
Уҡтар атҡан, ҡылыс сапҡан -
Күпме ҡыймаһын ҡынын,
Ҡуштан булмаған халҡым!..
Халҡым хаҡында хаҡ һүҙем
Булалһа яҙғандарым -
Мәшһүрлек ҡаҙанғанмын!

* * *

Ижади ҡыш, гүйә, һөйгән йәрем,
Йән биләгән тойғо - хисләһе.
Ә яҙ етһә, ҡәләм көрәк була,
Күҙ үткәнсә мин ер кешеһе.
Бөтәһе лә ерҙә эҙләнеүҙән:
Аҙығым да, уй ҙа, ижад та...
Шәхесемә минең ҡағылғанда,
Онотмағыҙ, зинһар, шул хаҡта.

### Халыҡ даны

Хәтер - диңгеҙ: йә ағыҙа,
Һалып ҡуя йә төбөнә.
Быуат-быуат тарих һыйған
Кешелектең хәтерәнә.

Тәүтормошта ташҡа яҙған,
Яҙмағанын әйткән телдән.
Ҡағыҙ тапҡан - барын яҙған,
Күпме яҙма беҙгә еткән.

Кеше бөйөк - өйрәнеүҙән,
Кеше даһи - эҙләнеүҙән...
Ағып бөтмәҫ, аҫҡа төшмәҫ
Ҡалһын ине тарих беҙҙән.

Ҡулға ҡәләм алайыҡ беҙ
Изге өмөт, ҙур хыялдан.
Үҙ халҡының бөйөк даны -
Ижадсыға иң оло дан!

✓ *Ҡыҙ Ҡөрьән-Кәримде лә бик тиҙ ятлап ала. Уны ятлау шулай башлана: төшөндә аҡ кейемле, ап-аҡ сәсле бабай Әлифәне тубығына ултыртып, иман шартын өйрәтә.*



*БАҠСА*



# ҠЫЯР ҮҪТЕРЕҮҘӘ...

## һыналған ысулдар

**Ҡыяр үҫтереүе бер үк ваҡытта еңел дә, мәшәҡәтле лә. Орлоҡтарҙы еүешләп, шыттырып ултыртһаң да, ваҡытында һыу ҡойһаң да, ҡырауҙар ваҡытында япһаң да, ҡайһы бер йылдарҙа ҡыяр уңышы һәйбәт булмай.**

Ҡыяр яҡшы уңыш бирһен тиһәгеҙ, уларҙы даими рәүештә туҡландырып торорға кәрәк. Мин ашламаны икмәктән әҙерләйем. Биҙрәнең өстән ике өлөшөн ҡара икмәк киҫәктәре менән тултырам, һыу ҡоям һәм улар өҫкә ҡалҡып сыҡмаһын өсөн берәй нәмә менән баҫырам. Биҙрәне йылы урынға ике аҙнаға әсетергә ҡуям. Килеп сыҡҡан әсеткегә (1:3) һыу өҫтәйем һәм ҡыярҙарҙың һәр ҡыуағы төбөнә ярты литрлап ҡойоп сығам.

Ҡыяр үҫә генә башлап, мул итеп сәскә ата башлаһа, ялған онло ысыҡ, вируслы сирҙәр барлыҡҡа килә, үҫентеләр серей. Бында ла халыҡ ысулдары ярҙамға килә. Әгәр ҙә ҡыярҙарым сирләй башлағанын күрһәм, шунда уҡ үҫентеләрҙе 1 литр һыуға 1 г мочевина һалып иҙеп, шуны һибәм. Ҡыяр сирҙәренә ҡаршы түбәндәге сара файҙа бирә: 10 өлөш һыу, 1 өлөш һөттән торған ҡатнашмаға 5-10 тамсы йод тамыҙып, ҡыярҙың ян һабағына ике яҡлап һиптерәм. Серей башлаған урынға иҙелгән күмер йәки аҡбур һибәм, ауырыу йәшелсәләрҙе йырағыраҡ ташлайым.

Уңыштың түбән булыуында ҡыярҙың ҡатын енесле сәскәләренең һеркәләнмәй тороп ҡалыуы сәбәпсе. Ғәҙәттә, ир енесле сәскәләрҙән һеркәне күсереү эшен бөжәктәр башҡара. Ҡайһы сәскә ниндәй енесле икәнен сәскәнең нигеҙ өлөшөн тикшереп белеп була. Нигеҙҙәге ҡыярҙы хәтерләтеүсе шешмәк сәскәнең ҡатын енесле булыуын күрһәтә. Бындай шешмәге булмаған ир енесле сәскәне өҙөп алып, сәскәнең уртаһынан сығып торған башаҡ менән ҡатын енесле сәскәнең уртаһына төртөп сығырға ғына кәрәк. Быны ипләп кенә, таҙа ҡулдар менән башҡарырға. Шулай итеп, ҡыяр уңышы үҙегеҙҙең ҡулда.

Һыуҙы мотлаҡ йылытып ҡойорға кәңәш итәм. Бының өсөн иртән һауыттарҙы һыу менән тултырып ҡуйыу уңайлы. Көнө буйы ул йылынып торасаҡ. Һыуҙы көнөнә ике тапҡыр: иртәнге 10-дан 11-гә тиклем һәм кисен 17 сәғәттә һибергә тырышам.

Ҡыярҙың бер өлөшөн ябай түтәлдәрҙә үҫтерәм. Был ысул ябайыраҡ, тик унда уңышты йыйып алыуы ауырыраҡ. Ҡыяр үҫә торған тотош территорияны биләп ала, бер-береһенә үрелә. Был осраҡта һыу ҡойоуы ла, туҡландырыуы ла ҡыйыныраҡ. Бындай түтәлдәге үҫентеләр тиҙерәк һына, бынан төрлө сирҙәр барлыҡҡа килә. Икенсе ысулда ҡыярҙарҙы шпагат менән бәйләйем һәм ҡыярҙар шпалерҙа үҫә. Был ысул ҡатмарлыраҡ булһа ла, ҡыярҙарға яҡтылыҡ яҡшы төшә, улар бәләкәйерәк майҙанды ала. Тик ҡыяр үҫентеләрен сәғәт уҡтары буйынса даими әйләндереп торорға кәрәк, юғиһә, улар бер-береһенә йәбешеп үҫәсәк.

Әйткәндәй, хәҙер сүп үләндәренә ҡаршы көрәшеү мәле. Мин йәш сүп үләндәрен йолҡоп тормайым, тәпке менән тураҡлап сығам. Элек сүп үләндәрен тамыры менән йолҡоп алһаң, улар юҡҡа сыға тип уйлай инем. Әммә был юл бик ауыр эш талап итә һәм көтөлгән һөҙөмтәне бирмәй. Шуға ла баҡсамды таҙа тотоу өсөн тәпкенән дә яҡшыраҡ ҡорал юҡлығына ышандым. Бер ике тапҡыр сабып ырғытҡандан һуң хатта бәпембәләр ҙә башҡа үҫмәйәсәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

**Ергә кешеләр килә, китә тора. Һәр кем ысынбарлыҡты танып белергә, йәшәйеш серен төшөнөргә, үҙенең кем икәнлеген аңларға, камиллашырға, ысын кеше булып йәшәп, донъялыҡта матур иҫтәлектәр ҡалдырырға тырыша. Был мәңгелек хәҡиҡәт. Әммә һәр кем әүлиә дәрәжәһенә күтәрелә алмай, ул Хоҙай тарафынан бирелгән һәләттер.**

# СӘЛЙЕҒОЛ МӨҒЖИЗӘҺЕ...



Кеше организмында биш һиҙеү ағзаһы бар. Уларҙан тыш, кешенең күрәҙәлек, йәғни хәл-ваҡиғаларҙы алдан күрә белеү кеүек феноменаль һәләте бар - быны фән иҫбатланы инде. Йылдар аша күреүсе шәхестәр боронғо замандарҙан уҡ булған: Кассандра, Тиресий, Жанна д’Арк, Швед Короле Карл XI (1655-1697), АҠШ-тың тәүге президенты Джордж Вашингтон (1732-1799), француз Мишель Нострадамус (503-1566), Ванга һәм башҡалар. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ ҙа әүлиәләр, изгеләр иле. Бәлки, беҙгә билдәле һәм билдәһеҙ әүлиәләребеҙ ҙә ошо исемдәре аталған кешеләр кимәлендә булғандыр? Быны беҙ белмәйбеҙ. Халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәрен юғалтҡан кеүек, әүлиәләребеҙ тураһындағы хәтерҙе лә юғалта яҙғанбыҙ. Әммә бөтөнләй үк түгел, ҡайһы берҙәре тураһындағы иҫтәлек халыҡ телендә, хәтерендә һаҡлана әле. Мәҫәлән, теге быуат башында йәшәгән Мөжәүир, Шәмиғол хәҙрәттәрҙе күреп белеүселәр бөгөн дә йәшәй. Уларҙан алдараҡ йәшәгән Зәйнулла, Ғабдулла Сәиди, Ғатаулла ишандар тураһындағы хәтер ҙә тере.

Мәсетле ере лә әүлиәләр тураһында иҫтәлектәр һаҡлай. Мосолман ҡәрҙәштәр йыйылған сараларҙа, йома намаҙында беҙҙең Әүхәҙи һәм Әнүәр хәҙрәттәребеҙ мәрхүмдәр рухына доға ҡылғанда Сәлйеғол ауылынан Әлифә әбейҙең исемен әйтмәй ҡалдырмай. Ә Әлифә әбей әүлиәләр затынан булған. Уның өләсәһе Гөлсәғиҙә имсе булып, кешеләрҙе дауалаған, бәләгә тарығандарға ярҙам иткән. Бер-бер хәл булһа, Хоҙай бәндәләре мотлаҡ "Гөлсәғиҙәгә барып белеп киләйек әле", тиер булған.

Гөлсәғиҙә әбейҙең Миңдиәхмәт тигән улы була. Үҫеп буй еткергәс, атаһы уны бер урыҫҡа эшкә бирә. Бер аҙ эшләгәс, егет мәрткә китеп, 3 көн, 3 төн йоҡлай. Уянғандан һуң: "Мине был урыҫта ҡалдырмағыҙ - ул гонаһ", - ти. Ата-әсәһе уны алып ҡайтып китеп, күршеләге башҡа ауылға эшкә ебәрә. Бер аҙ хәлләнгәс, Миңдиәхмәт өйләнә. 1909 йылда Һабанаҡ ауылында йәшәгәндә уларҙың ап-аҡ йөҙлө ҡыҙҙары тыуа. Уға Әлифә тип исем ҡушалар. Әлифә өс йәшендә әсәһенән, 6 йәшендә атаһынан етем ҡала. Туғандары был нурлы баланы бик ҡәҙерләп үҫтерә. Бер бите алһыуланып янып тороп була Әлифәнең. Ул Һабанаҡ мәктәбендә дини белем ала. Зирәклеге менән айырылып торған ҡыҙ Ҡөрьән-Кәримде лә бик тиҙ ятлап ала. Уны ятлау шулай башлана: төшөндә аҡ кейемле, ап-аҡ сәсле бабай Әлифәне тубығына ултыртып, иман шартын өйрәтә. Был һабаҡтар, Ҡөрьән сүрәләрен ятлауҙар төштәрендә артабан да дауам итә.

Әлифә 23 йәшендә Сәлйеғол ауылына килен булып төшә. Еңгәләре, апалары уны самауыр, һыйыр, һандыҡ биреп, бирнә менән оҙаталар. Кейәүе, 17 йәшлек Әбделхай Әлифәгә үлеп ғашиҡ була. Хәлле генә йәшәп китәләр. Әбделхай Әбделҡадир старостаның улы була. 1932 йылда арба, аттар, һарыҡ, келәттәрен биреп, улар ҙа колхозға керәләр. Әбделхай тракторист була, Әлифә колхоз эшенән ҡалмай, икеһе лә уңған, алдынғы колхозсы булып таныла. Йәш ғаиләлә өс бала тыуа, тәүгеһенә Рәйфә тип исем ҡушалар. Атай кеше икенсегә малай көтә, ләкин икенсегә тағы ҡыҙ бала - Ғәлиә тыуа. Әбделхай байтаҡ ваҡыт баланы ҡулына алмай, көйөнөп йөрөй. Төшөндә "Был бала ғаиләңә ырыҫ-дәүләт килтерер, бәлә-ҡаза урап үтер", тигәнде аңғарталар. Шунан ғына атай кеше ҡыҙын ҡулына алып һөйә башлай. Өсөнсөгә һағынып көткән ир бала - Фәриттәре тыуа. Әммә тулы бәхет оҙаҡ дауам итмәй, Әбделхайҙы 1943 йылда һуғышҡа алалар. Шул китеүенән ул әйләнеп ҡайтмай, һуғышта һәләк булып ҡала.

Әлифә оҙон көн буйы колхоз эшендә йөрөй. Нисек тә һыйырҙан өҙөлмәҫкә, балаларын астан үлтермәҫкә тырыша. Ауыр һуғыш йылдарында бар ауырлыҡты үҙ иңенә йөкмәгән ауыл ҡатын-ҡыҙҙары өсөн ҡураныс ҡына Әлифә рух көсө биреүсе була. Күптәргә ярҙам итә, күптәрҙе бәлә-ҡазанан аралай, Ҡөрьән-Кәрим сүрәләрен, доғалар өйрәтә. Колхоз малын баҡҡан, баҫыу эштәрендә ал-ял белмәй тир түккән ҡатындарҙы ул сабыр булырға, һәр эште бисмилла әйтеп башларға өйрәтә. "Аллаһты үҙегеҙ менән бергә йөрөтөгөҙ. Аллаһтың көнө етә, мәсет манараларында ай балҡыр", тип ҡабатлар була.

Әлифәнең шул осорҙа күрһәткән ярҙамы, дауалары тураһында иҫтәлектәр бик күп. Бер ваҡыт Арый ауылынан ирле-ҡатынлы уҡытыусылар елкәһенә ҙур шешек сыҡҡан баланы дауаларға алып килә. Әлифә уларға: "Тәлмәрйен тиреһен һыҙырып алығыҙ ҙа, шешеккә ябығыҙ, улығыҙ шәбәйер, - ти. - Тик берүк дауаханаға барып ярҙыра күрмәгеҙ", - тип киҫәтеп тә ҡуя. Тик ата-әсә быны ниндәйҙер шаяртыу, томаналыҡ тип ҡабул итә. "Бында килгән беҙ иҫәр, бысраҡҡа сумып йөрөгән тәлмәрйен тиреһе нисек шәбәйтһен был сирҙе?" тип һөйләнә-һөйләнә ҡайтып китәләр. Ете йәшлек бала дауаханала операциянан һуң һәләк була.

Яҙҙы көс-хәл менән көтөп алған аслыҡтан интеккән кешеләр берҙән-бер көндө баҫыуға былтырғы башаҡты сүпләргә сыға. Әлифә быны ни менән бөтөрөн алдан күреп тора. Күк үләнде көтөргә, башаҡҡа йөрөмәҫкә ҡуша, кемдәрҙер уның һүҙенә ҡолаҡ һала, кемдәрҙер тыңламай һәм башаҡ шытығын ашап, тамаҡтары шешеп, һәләк була.

Сығарылыш класс уҡыусылары күмәкләп Әлифәгә килә һәм уларҙың киләсәген юрауҙы һорай. Әлифә уларға алыҫ киләсәк тураһында әйтмәй, ә бына имтиханда һәр уҡыусыға эләгәсәк билет номерын әйтә. Бөтә синыф менән балалар имтихандарҙы тик яҡшы билдәләргә тапшыра. Директор килеп, үпкә белдергәс, Әлифә уға: "Балалар шатланһа, насармы ни? Заманы ниндәй бит! Үҙенде лә эштән сығарырға торалар әле",- тип яуаплай. Ысынлап шулай була ла.

1943 йылда төшкө аш мәлендә "Ҡасан ғына һуғыш бөтөр икән?" тип әрнеп әйтеп ҡуя бер ҡатын. Шул саҡ Әлифәнең тауышы ишетелә: "1945 йылдың 9 майында..." Ҡатындар был датаны бер ҡағыҙ киҫәгенә яҙып ҡуя. Был хәбәр тирәяҡ ауылдарға ла тарала. Ике йыл үтә. Ашлыҡ сәскән саҡ. Әлифә әхи-

рәттәренә 18 көндән оло Енеү булаcағын әйтә.

Был илдән кеме генә юҡ, тигәндәй, Әлифәне лә яратып етмәүселәр табыла. Был хәл һуғыштан һуң була. "Был ҡатынға шайтан эйәләшкән, өй мөйөштәренә атып, ендәрен ҡурҡытырға кәрәк", тип хәбәр тараҡҡас, ауыл советы рәйесе менән колхоз рәйесе хатта мылтыҡ тотоп, өйҙәренә килә. Өс балаһын ҡукрәгенә ҡыҫып, Әлифә: "Мылтыҡ атылмаҫ, балаҡайҙарым, ҡурҡмағыҙ", - тип ҡурҡышҡан балаларын йыуата. Ни гәжәп: ҡороулы мылтыҡ атмай ҙа ҡуя. Килеүселәр быға хайран булып, Әлифәнең дөрөҫтө һөйләүенә иналалар.

Әүлиә ҡатындың икенсе ҡыҙы Ғәлиә 8 йәшенән гел әсәһе эргәһендә колхоз эшенә йөрөй, 12 йәшендә бесән сабырға өйрәнә, сана менән төнөн ҡаса-боҫа утынға барғанда ла был бала төп ярҙамсы була. Ғәлиә инәйгә бөгөн 74 йәш. Әсәһе менән булған хәлдәрҙе ғәжәп итеп һөйләй ул.

-Бер ваҡытта ла кәтәүҙән ҡайтмай ҡалған малды эҙләп йөрөмәнек, әсәйем белеп, күреп торҙо. Шулай бер саҡ ураҡ урып йөрөйбеҙ. Эргәбеҙгә яй ғына атлап бер ағай килә. "Үҙең минә ышанмайһың, үҙең ярҙам һорап килә ятаһың, юғалған малың аҡ башлымы?" тип, әсәйем үҙе һүҙ башланы. Аҡ башлы атын таба алмай икән ағай кеше. "Дегәнәклекте беләһеңме, шунда ул атың", тигәс, ағай шатлығынан һикереп китте...

Әсәйем бер саҡ төрмә эргәһенән үтеп бара икән. Бер тотҡондоң бик әрнеп, түгелеп илауын күреп, доға уҡый. Был бәндә гәйепһеҙгә хөкөм ителгән була. Тиҙҙән ул төрмәнән ҡаса. Уны һаҡлаған милиционер, ҡурҡып, ярҙам итеүен үтенеп, әсәйемә килә. "Мине был тотҡон өсөн эшемдән сығарасаҡтар, үҙемде хөкөм итәсәктәр", ти милиционер. "Бер ни булмағандай, йөрөп тик ят, онот һин ул тотҡондо", тип, әсәйем уны тынысландырып сығарып ебәрә. Ысынлап та, был тотҡон тураһында аҙаҡ берәү ҙә телгә алмай.

Һуғыштан һуң эш хаҡына заем бирәләр ине бит. Гәзиттә таблица баҫылғас, әсәйем заемдарҙы алды ла, "Бына быныһы йылҡылдай", тип, береһен айырып ҡуйҙы. Шул заемға 300 һум отош сыҡты. Уға ҙур һөт айырғыс һатып алдыҡ. Бөтә ауыл ҡатындары ҡаймаҡ ағыҙып рәхәтләнде, сират көтҡәндә әсәйемдән кәңәш һорайҙар, дауаланып ҡайтып китәләр. Күҙҙәренә арпа сыҡҡандарҙы башлы һуған һөртөп дауаланы. Ҡанды таҙарта, көс тә бирә, тип, хәлһеҙҙәргә үгәй инә үләне тамырын ҡайнатып эсерҙе. Был Хоҙай Тәғәлә үләне, ти ине уны.

Бер көн әсәйем менән башаҡ сүпләргә киттек. Баҫыуға килеп етеү менән кире бороldоҡ. "Өйҙә бәлә булырға тора", тине әсәйем. Бәләкәй Фәрит энем бәрәңге әрсеп, туҫтаҡҡа һалған да, һике аҫтына сатыр-сотор өйөп, ут тоҡандырып, шунда бешеренергә уйлаған. Тик шырпыны ыҙылмай ыҙалата икән. "Нинә тиҙ ҡайттығыҙ, бәрәңгем бешеп өлгөрмәне бит", тип ризаһыҙлығын белдергән була етмәһә.

Колхоздың йәшелсә баҡсаһы һыу буйында ине, ҡыярға иртәле-кисле етмешәр көйәнтә һыу һибәбеҙ. Баҡсаның эргәһендә генә өй дәүмәлле таш бар. "Анау таш ярылһа, ни эшләйбеҙ инде?" тине бер саҡ апайым. "Ул ташҡа бер ни булмаҫ, ә бына тауҙы ярып, күпер һалырҙар. Оло юл ауылдан ситтә, шул күпер яныннан үтер, оҙон машиналар йөрөр. Алтын да табылыр. Аллаһтың көнө етер, кәүә малы ишәйер, кешеләр үҙҙәре менән үҙҙәре һөйләшеп йөрөр, күплән күккә осорҙар, минең исемемде муллалар мәжлестәрҙә телгә алырҙар", тине әсәйем уға яуап итеп. Былар барыһы ла дөрөҫкә сыҡты, алтын тигәндәре - нефть яҡтылығы булған, әсәйем үлгәс, шул урынға маяҡ ҡаҙап киттеләр...

1960 йылда мин Йонос ауылына килен булып төштөм. Яусы ҡайтып киткәс, әсәйем үҙ алдына ғына: "Ҡәйнәндең ҡыҙыл балитәкле күлдәге бар икән..."- тип әйтеп ҡуйҙы. Ҡәйнә йортона тәүләп аяҡ баҫҡас, мин ул күлдәктең кер бауында элеүле торғанын шәйләнем дә әсәйемдең баяғы һүҙҙәрен иҫкә төшөрҙөм. Ошондай хәлдәр бик күп булып торҙо. Тик ул динһеҙлек, Аллаһыҙлыҡ заманында был күренешкә халыҡ шикләнеп ҡараны, Әлифә аҡылға бер көйө, тиеүселәр ҙә булды. Әсәйем баҫалҡы ғүмер итте, күп серҙе үҙе менән алып китте. Беҙгә: "Минең исемгә хәйер һалып йөрөгөҙ, доға ҡылығыҙ, эштәрегеҙ уң булыр", - тип әйтә торғайны...

Беҙҙең яҡтарҙа ололар Әлифә инәй әйткән аҡылды әле лә һүҙҙәренә ҡушып һөйләй: "Әлифә инәй әйткәнсә, - тип башлап китә улар һүҙҙәрен, - донъя ҡоролошон Аллаһы Тәғәлә бер тәртипкә ҡуйған, һәр нәмә шул тәртипкә буйһона, был оло Ғәләм ҡануны, уға буйһонмағандар юҡҡа сыға. Бойҙай бөртөгөндәй ҡырмыҫҡа үҙе оло мөғжизә. Ул урманды зарарлы бөжәктәрҙән таҙарта, үҙ һуҡмағын булдырып, йорт төҙөй, унан ҙур йылан да ҡурҡа..."

**Сәгиҙә МӨХӘРӘМОВА,**
**Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы.**
**Мәсетле районы.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Өҫтөнлөк бирмәгеҙ

Ғаиләлә гармония һәм үҙ-ара аңлашыусылыҡты һаҡлау өсөн мөхәббәткә лайыҡ булған нәмәләрҙе дөрөҫ урынлаштырыу бик мөһим:

1. Аллаһы Тәғәлә (тәү сиратта Аллаһы Тәғәләне яратабыҙ).
2. Мин (үҙебеҙҙе яратабыҙ).
3. Ир-ҡатын һәм уның мәнфәғәттәре.
4. Балалар.
5. Атай-әсәй.
6. Йорт (төҙөләш, уңайлыҡ).
7. Эш.
8. Туғандар.
9. Дуҫтар.
10. Һәм башҡалар.

## Тормошта күҙәтелгән хаталар

1. Аллаһы Тәғәлә хаҡында оноталар (ауыр саҡтарҙа ғына иҫкә төшөрәләр).
2. Үҙҙәрен һуңғы урынға ҡуялар.
3. Балаларҙы тәүге урынға ҡуялар (Аллаһы Тәғәлә урынына).
4. Ата-әсәне ир йәки ҡатындан өҫтөн ҡуялар (әсәй ҡушҡанды ғына үтәп йәшәйҙәр).
5. Балаларҙы ирҙән өҫтөн ҡуялар - эгоист тәрбиәләйҙәр (ирҙе һанға һуҡмайҙар).
6. Дуҫтарҙы, туғандарҙы йорт һәм эш мәнфәғәттәренән өҫтөн ҡуялар (ремонт урынына күңел асыу).
7. Эште беренсе урынға ҡуялар (йәшәү мәғәнәһе).

## Эйәләшеү (бәйлелек) тураһында

Эйәләшеү кемделер, нимәнелер аллалаштырыуға килтерә, артабан уларҙы юғалтырға тура килә, шуға бер нәмәне лә аллалаштырырға ярамай. Мәҫәлән, кеше матди ҡиммәттәргә (аҡса, машина, өй ярата һ.б.) эйәләшә - уларҙы аллалаштыра, йәғни тормош мәғәнәһен бәйлыҡта күрә, артабан инде ул кеше тап шуларҙы юғалтасаҡ. Беҙ нимәгә ныҡ эйәләшәбеҙ, тап шуны тартып алалар (иң ҙур ҡиммәт - Аллаһы Тәғәлә икәнен аңлатырға тырышалар). МММ эпопеяһын иҫләйһегеҙме? Кем аҡсаға эйәләшкән (уларҙы ярата), күпме аҡсаһын юғалтты!

Ҡайһы бер әсәләр балаларын шул тиклем ныҡ ярата - уны үҙенең ижад емеше итеп ҡарай башлай, шул уҡ ваҡытта уны Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергәнен һәм бүләк иткәнен онота. Шуға күрә, тәү сиратта, Аллаһы Тәғәләне яратырға һәм бүләк иткән сабый өсөн рәхмәтле булырға кәрәк. Моғайын, был ваҡытта ир кеше лә ситтә ҡалмағандыр.

Уҡытыусыларға ла, уҡыусыларға ла эйәләшергә ярамай. Бер кемдән дә һынташ, идол яһамағыҙ - улар ҡоларға һәләтле.

Һәр китапта дөрөҫ мәғлүмәттең ялған менән аралашып килеүен онотмағыҙ, йәғни уларҙы ла кеше яҙған һәм кеше төҙәткән. Һәр мәғлүмәтте йөрәгегеҙ аша үткәрегеҙ. Әгәр ниндәйҙер юлды уҡығанда хәүеф тойғоһо тыуа икән, тимәк, башҡа мәғлүмәт дөрөҫ булғанда ла был юлдағы мәғлүмәттең дөрөҫ булмауы ихтимал.

Ниндәйҙер ҡанундар, ҡағиҙәләр сигендә булыу ҙа ҡурҡыныс. Улар фекерләүҙе сикләй. Ә ҡайҙа сикләү - унда торғонлоҡ, унда үҫеш юҡ. Донъя бер урында ғына тормай, кисә дөрөҫ булған нәмә бөгөн ялған булыуы мөмкин, сөнки бөтә нәмә үҙгәрә. Телә нин ниндәй китапта бирелгән белем - океан һыуының әнә осондағы тамсыһына тиң һәм океандың үҙенә күҙ йоморға ярамай.

Бер ниндәй һәләткә, аҡылға, зирәклеккә эйәләшергә ярамай - был эгоны арттыра. Теләһә ниндәй һәләт Аллаһы Тәғәлә тарафынан бүләк ителгән. Тимәк, әгәр беҙ нимәләргә эйә икән, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булырға кәрәк!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Маҡсат ҡуйыу сере

**"Аҡылын дөрөҫ көйләгән кешене маҡсатына табан барғанда бер нәмә лә туҡтата алмай; шул уҡ ваҡытта аҡылын яңылыш көйләгән кешегә ер йөҙөндә бер нәмә лә ярҙам итә алмай", тигән В.В. Циге. Эйе, ниндәйҙер кимәлдә уңышҡа өлгәшкән барлыҡ кешеләр - финанс донъяһы лидерҙарынан алып бәхетле ғаиләләге ата-әсәләргә тиклем - барыһы ла дөйөм ныҡлы ғәҙәткә эйә: улар алдарына маҡсат ҡуя.**

Аныҡ билдәләнгән маҡсаттар уңыш нигеҙе һәм тормошта юғары ҡаҙаныштарға өлгәшеү нигеҙе булып тора. Аныҡ билдәләнгән маҡсатһыҙ - яҡын киләсәккә булһынмы ул, оҙайлы ваҡытҡамы - һеҙ дингеҙҙә аныҡ курс алмай йөҙгән карапҡа оҡшаясаҡһығыҙ. Әгәр һеҙ аныҡ маҡсаттар ҡуйһағыҙ, мейегеҙ шунда уҡ уны нисек тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләй башлаясаҡ.

Тәбиғәттең төп ҡанундарының береһе - иғтибарығыҙҙы көслө дәрт һәм тап шулай булырына ышаныс менән нимәгәләр йүнәлтеү һәм уның мотлаҡ тормошҡа ашыуы. Был боронғо принципты ҡулланып, һәр саҡ насар, кире уйлап, тормошоғоҙҙо боҙоуығыҙ ҙа ихтимал. Шуның өсөн тәү сиратта уйҙарығыҙҙы яйға һалығыҙ.

**Маҡсатҡа өлгәшеүҙең ете аҙымы:**

**1.** Нимә теләгәнегеҙҙе аныҡ белеү. Үҙегеҙҙең нимә өсөн йәшәгәнегеҙҙе һәм эшләгәнегеҙҙе асыҡлағыҙ. Йәғни нимә эшләргә яратҡанығыҙҙы һәм уны баһалаусыны табығыҙ. Моғайын да, тормош маҡсаттарын билдәләү өсөн иң яҡшы ысул булып үҙеңә некролог яҙыуҙы күҙ алдына килтерергә кәрәктер. Эйе, эйе, үҙегеҙҙе үлгән тип уйлағыҙ ҙа, унда үҙегеҙ, ҡаҙаныштарығыҙ тураһында нимә ишетергә теләгәнегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Был донъялағы иң бай кеше ине, йәки иң яҡшы пианист, һөнәр эйәһе, йә булмаһа, быға бер кем татымаған бәхетте татыған бәхетле кеше ине, тиеүҙәрен теләйһегеҙме? Ә хәҙер етди итеп биш, ун, 15 йылдан һуң ниндәй булырға теләүегеҙ тураһында уйланығыҙ. Былар - һеҙҙең тормош маҡсаты буласаҡ.

**2.** Алдығыҙға аныҡ маҡсаттар ҡуйыу, үтәлеү ваҡытын билдәләү һәм эш стратегияһын әҙерләү. Маҡсаттарығыҙҙы билдәләгәс, уларҙы ҡағыҙға яҙығыҙ һәм уларҙы күсереү мөмкин булмаған ҡаты ваҡыт сикләүе ҡуйығыҙ. Бынан һуң алға барыуығыҙҙың көндәлек планын эшләгеҙ. Ҙур маҡсаттарға барыу ваҡ аҙымдарҙан башлана! Инвалид коляскаһында Ер шарын урап сыҡҡан Рик Хансендан феноменаль ҡаҙанышының сере тураһында һорағас, ул үҙенең 24 901 миль үтергә тейешлеге түгел, ә сираттағы 23 милде һәм көнөнә шундай өс араны үтеүгә иғтибар бүлеүен белдерә. Аҙҙан, бәләкәйҙән башлағыҙ. Бәләкәй еңеүҙәр ҙур еңеүгә килтерә.

**Робин ШАРМА.**



## 11 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.15 "Моя любовь"
06.40 "Берег"
08.00 "Служу Отчизне!"
08.35 "Дисней-клуб"
09.00 "Смешарики. Пин-код"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Верные друзья". Лирическая комедия
14.10 "Женские мечты о дальних странах"
18.10 "Александр Пороховщиков. Нам не жить друг без друга"
19.10 "Дом на краю". Криминальная драма
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет", 1-я серия
22.30 "Возвращение в голубую лагуну". Приключения
00.30 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Украины - сборная Швеции. Прямой эфир из Украины
02.45 "Неестественный повод"
04.30 "В паутине законе"
05.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.05 "Мы с вами где-то встречались". Комедия
07.00 "Экипаж". Остросюжетный фильм
09.55 "Космическая стража"
10.50 "Записки экспедитора тайной канцелярии". Сериал
12.40 "Песня года". Часть первая"
14.00 "Вести"
14.15 "Песня года". Часть первая". Продолжение
15.55 "Кукушка". Военная драма
19.35 "Когда зацветет багульник". Мелодрама
21.40 "Вести"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. Франция - Англия. Прямая трансляция из Украины
00.00 "Когда зацветет багульник"
01.45 "4 таксиста и собака". Комедия
03.55 "Домашняя вечеринка"

### НТВ

05.40 "Супруги". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Дикий мир"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Платина-2. Свои и чужие", 1-6-я серии. Сериал
19.00 "Сегодня"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение", 4 серии. Сериал
23.15 "Красивая моя". Концерт Александра Новикова
01.05 "Час Волкова". Сериал
02.05 "Главная дорога"
02.40 "Рублевка. Live". Сериал
04.35 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "В поисках немо"**
**09.30 "Взгляд без слов"**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Замандаштар"**
**11.45, 19.00 "Весело живем"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Здоровое решение"**
**14.00 "Зов Урала". Концерт**
**16.00 "Третий звонок". Н. Абдыкадыров "Последнее море Чингисхана". Спектакль**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.15 "Хазина"**
**19.45 "Башкорттар"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Южные широты"**
**21.00 "На самом деле"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфа-Ленинград". Обратный билет"**
**22.30 "Башкорт йыры-2012"**
**23.00 "Итоги XVIII Международного фестиваля балетного искусства им. Р. Нуреева"**
**23.45 "Гала-концерт звезд мирового балета"**

## 12 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.15 "Бременские музыканты"
06.35 "Берег"
07.55 "Барышня-крестьянка"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Две звезды. Лучшее"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Десантура", 8 серий
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Десантура"
18.00 Вечерние новости
18.15 "Десантура", закл. серии
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет", 2-я серия
22.30 "Золотой граммофон"
00.30 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная России - сборная Польши. Прямой эфир из Польши
02.40 "Несокрушимая Мирабай". Мелодрама

### РОССИЯ 1

06.00 "Калина красная". Мелодрама
08.10 "Испытание верности". Мелодрама
10.10 "Записки экспедитора тайной канцелярии". Сериал
12.10 "Песня года". Часть вторая"
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации
15.00 "Песня года". Часть вторая"
16.00 "Вести"
16.15 "Песня года". Часть вторая". Продолжение
16.45 "Служебный роман". Комедия
19.45 "Дела семейные". Мелодрама
21.40 "Вести"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. Греция - Чехия. Прямая трансляция из Польши
00.00, 03.55 "4 таксиста и собака-2"
02.00 "Россия молодая". Концерт

### НТВ

05.35 "Детское утро на НТВ"
05.45 "Бомжиха". Мелодрама
08.00 "Сегодня"
08.15 "Бомжиха-2". Мелодрама
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Ошибка следствия". Детектив
12.15 "Развод по-русски"
13.20 "Паутина-2". "Свои и чужие". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
23.10 "Страшные лейтенанты". Детектив
01.00 "Час Волкова". Сериал
02.00 "Квартирный вопрос"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Король лев"**
**09.30 "Солнечный город мой". Концерт**
**10.10 "В поисках затерянного города-1"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30 "Торнакай". Благотворительная акция телеканала "Тамыр"**
**12.30 Новости**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Влюблен в тебя, мой город!" Концерт**
**13.45 "Легенда башкирского танца". Рашида Туйсина"**
**15.30 "Шаян уйын". Республиканский фестиваль юмора и смеха среди башкирских и татарских команд**
**17.45 "Башкорт йыры" представляет..."**
**18.45 "Суперневестка"**
**20.30 "В поисках затерянного города-2"**
**21.00 "Башкортостан - Стамбул. Дороги дружбы"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфа-Ленинград". Обратный билет"**
**22.30 "Уфимское "Времечко"**
**23.00 "Праздник курая"**
**00.30 "Зилимские бабушки"**

## 13 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет". Сериал
22.35 "Любовь глазами мужчин"
23.30 Ночные новости
23.50 "Удовольствие и боль"
00.40 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Голландии - сборная Германии
02.45, 03.05 "Директор"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 63-я серия
15.45 "Кровинушка", 88-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 10-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Суд"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. Дания - Португалия
00.00 "Вести+"
00.20 "Темные воды". Мелодрама
02.05 "Профилактика"
03.05 "Как только сможешь"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Привет из 90-х". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина-2". "Ненастоящий полковник". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Криминальный сериал
01.35 "Центр помощи "Анастасия"
02.25 "В зоне особого риска"
02.55 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 Новости**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.30 "Южные широты"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Тамле" (на башк. яз.)**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.30, 17.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.45 "Алтын тирмэ"**
**19.45 "Сделано в "Тамыре"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.00 КВН РБ. 1/8 финала ЦЛ "Поволжье"**

## 14 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор", 23-я серия
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет", 4-я серия
22.35 "Любовь глазами женщин"
23.30 Ночные новости
23.50 "Маленькие гиганты большого кино"
00.40 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Испании - сборная Ирландии
02.45, 03.05 "Бриллиантовый полицейский". Криминальная комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия"
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 64-я серия
15.45 "Кровинушка", 89-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 11-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Суд"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. Италия - Хорватия
00.00 "Вести+"
00.20 "Темные воды". Мелодрама
02.10 "Профилактика"
03.25 "Цепная реакция"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный".Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина". "Ненастоящий полковник". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Красная карточка", 4 серии
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Чудо-люди"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Адвокат". "Роман с камнем". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Тэмле"**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 Концерт**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Гэлэмэт донъя"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Пора разобраться"**
**19.45 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Глас закона"**
**23.00 "Чарли и шоколадная фабрика"**

## 15 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор", 25-я серия
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.55 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Украины - сборная Франции. Прямой эфир из Украины
00.00 "Фабрика звезд. Россия - Украина"
01.35 "Закрытый показ". "Переселенец". Драма
03.45 "В паутине законе"
04.35 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "Ауаз"
09.55 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 65-я серия
15.45 "Кровинушка", 90-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести ПФО"
17.50 "Сваты-4", 12-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.35 "Гений". Детектив
00.40 Футбол. Чемпионат Европы. Швеция - Англия
02.45 "Гений"
03.55 "Закон и порядок"
04.50 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.40 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Развод по-русски"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Чужой среди чужих", 4 серии
23.15 "Глухарь". Сериал
01.15 "Мой ласковый и нежный май"
02.15 "Спасатели"
02.50 "Рублевка. Live". Сериал
04.40 "Адвокат". "Гроза". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Гэлэмэт донъя"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Пора разобраться". Ток-шоу**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Селтэр". Первый республиканский фестиваль сценического костюма**
**19.45 "Йома"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.15 "Сабантуй-2012"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 Криминальный спектр"**
**23.45 "Муз-базар"**
**00.15 "Дарман"**

## 16 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Срочный вызов"
06.00 Новости
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.50 "Смешарики. Пин-код"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Александра Захарова. Непокорная дочь"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Освобождение". Фильм 3-й и 4-й
16.20 "Китайская бабушка". Комедия
18.00 Вечерние новости
18.20 Праздничный концерт
19.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
21.00 "Время"
21.25 "Большая разница"
22.25 "Багровые реки". Триллер
00.30 Чемпионат Европы по футболу-2012. Сборная России - сборная Греции
02.45 "Адам". Мелодрама
04.30 "В паутине закона"
05.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.20 "Трясина". Военная драма
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люда"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Измена". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Измена". Продолжение
16.55 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
21.05 "Бабье царство". Мелодрама
00.50 "Антидурь". Комедия
02.50 Футбол. Чемпионат Европы. Чехия - Польша
05.00 "Горячая десятка"

### НТВ

05.40 "Супруги". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Казнокрады". "Военно-полевая афера"
15.05 "Таинственная Россия: Западный Саян. Покинутая обитель внеземной цивилизации?"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Аферистка". Драма
00.50 "Час Волкова". Сериал
02.50 "Рублевка. Live"
04.45 "Адвокат". "Любовь рифма кровь". Сериал

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Валл-и"**
**09.30 "Взгляд без слов"**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Замандаштар"**
**11.45, 23.15 "Весело живем"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Здоровое решение"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". Н. Гаитбаев. "Любви все возрасты покорны". Спектакль**
**18.45 "Я не умер, башкиры!"**
**19.45 "Башкорттар"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Дарман"**
**21.15 "Сабантуй-2012"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры-2012"**
**22.30 "Ночной клуб "Суббота"**
**23.30 Гала-концерт межрегионального конкурса "Ирэндек мондары-2012" г. Сибай**

## 17 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Неоконченная повесть
08.00 "Армейский магазин"
08.35 "Дисней-клуб"
09.00 "Смешарики. Пин-код"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Женские мечты о дальних странах"
16.20 "Похудеть любой ценой"
17.25 "Призвание". Премия лучшим врачам России
19.05 "Минута славы. Мечты сбываются!" Финал
21.00 "Воскресное "Время"
22.15 "Багровый цвет снегопада". Драма
00.45 "Пожар"
02.20 "Футбольное шоу Вадима Синявского"
02.45 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Дании - сборная Германии

### РОССИЯ 1

06.00 "Трясина". Военная драма
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Измена". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Измена". Сериал. Продолжение
15.15 "Смеяться разрешается"
17.15 "Рассмеши комика"
18.00 "Расплата за любовь". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.00 "Примета на счастье". Мелодрама
22.40 "Обет молчания". Мелодрама
00.40 Футбол. Чемпионат Европы. Португалия - Нидерланды
02.50 "Отряд "Дельта": пропавший патруль". Боевик

### НТВ

05.40 "Супруги". Сериал
07.25 "Живут же люди!"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Казнокрады". "КГБ против МВД"
15.05 "Таинственная Россия: Красноярский край. Духи-людоеды реальны?"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Тайный шоу-бизнес"
23.00 "НТВшники"
00.05 "За пределами закона". Криминальная драма
02.05 "Кремлевские похороны"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Адвокат". "Поджигатели". Сериал

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Взгляд без слов"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Бауырсак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Шэп арба"**
**10.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 Концерт**
**15.45, 19.00 "Весело живем"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**16.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.00 "Воскресение"**
**17.30 "Любезники, любизар"**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Сабантуй-2012"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2012"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Гала-концерт межрегионального конкурса "Ирэндек мондары-2012"**

✓ *Был донъяла бер ниндәй хәүефһеҙ нәмә юҡ, хәүефтән ҡотолор ысулдар ғына бар.*

*(МакАртур).*

БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә беҙҙең ҡәҙерле кешебеҙ, Баймаҡ районының Ишмөхәмәт ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ **Мәрхәбә Ғәҙелша ҡыҙы Латипова** 80 йәшлек юбилейын билдәләй.



Күркәм юбилейы менән тәбрикләп, йөрәгебеҙҙән сыҡҡан йылы һүҙҙәребеҙҙе, ер йөҙөндә булған барлыҡ изге теләктәребеҙҙе еткергебеҙ килә уға. Һөйөклөбөҙгә һаулыҡтың ҡоростай ныҡлығын, ғүмерҙең иң оҙонон, көндәрҙең иң яҡтыһын, бәхет-шатлыҡтарҙың мөлдөрәмә тулыһын теләйбеҙ.

Уйҙарың яҡты, тыуыр таңдарың һәр саҡ аяҙ һәм нурлы булһын. Йөҙөндән бер ҡасан да йылмайыу, бәхет нуры китмәһен. Яҡындарыңдың күңел йылыһын тойоп, изгелектәрен күреп, балаларыңдың ҡыуаныстарына һөйөнөп, ҡәҙер-хөрмәткә төрөнөп йәшә лә йәшә.

**Ҡотлау менән балаларың.**

## 21-се һандағы сканворд яуаптары:

**Горизонталь буйынса:** Маринад. Протестант. Яһил. Аҡтамыр. Шарада. Зөбәржәт. Тире. Ҡорсаңғы. Велодром. Ултырғыс. Трейлер. Айғолаҡ. Әшнә. Бәпембә. Степлер. Сәс. Атаҡ. Либерал. Тәтелдәүек. Крәҫтиән. Арго. Бирт. Лайка. Дарыу. Сәскә. Схема. Кеше. Скульптор. Тромб. Нәшә.

**Вертикаль буйынса:** Яҡут. Консультант. Етәксе. Гид. Арсый. Престо. Еләк. Парад. Троллейбус. Ҡарыу. Хәстәр. Матриархат. Әйтем. Апломб. Ыштыр. Ихтыяр. Кәкүк. Пион. Зевс. Кәләш. Төлкө. Айбалта. Рәшә. Тәкә. Пешка. Радио. Ҡартлас. Лампас. Әрәсә. Тамуҡ. Нәмә.

ТУҠТА, МӘЛ!

# АУЫЛДА - БАЙРАМ

**Беҙҙен Баймаҡ районы Йәнйегет ауылында ла байрам итә беләләр. 9 май - Еңеү байрамы йыл да бик матур үтә беҙҙә. Быйыл да ауылда парад, митинг, концерт, сәй табыны ойошторолдо. Элек унда тик мәктәп уҡыусылары һәм уҡытыусылары ғына ҡатнашһа, хәҙер бөтөн ауыл ҡушылды.**

**Ләлә РАФИҠОВА.**










***✓ Федераль компонент индерелеүе арҡаһында башҡорт теле хәҙер өс сәғәт кенә уҡытыла. Башҡорт теле кәмегән хәлдә лә, уҡыу-уҡытыу, тәрбиә эшен башҡортса үткәреп, балаларға телдә башҡа саралар аша өйрәтергә тырышабыҙ.***



*БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ*

# БАШҠОРТ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНАН...

## башҡорт мәктәбенә күсеү еңелерәк



(Башы 1-се биттә).

### Һәр сарала ҡатнашабыҙ

Ошо көндәрҙә уҡыу йортонда балалар һабантуйы ойошторолдо. Кескәйҙәр йырланы, бейене, ярыштарҙа көс һынашты, бүләктәр отто. Уҡыу йорто директоры Гөлсара Килдеғолова әйтеүенсә, балалар һабантуйы йыл да уҙғарылып тора. Бынан тыш, шәжәрә байрамдарында, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡыҙҙар-малайҙар әүҙем ҡатнаша. "Быйылғы уҡыу йылы тәрбиә эше йәһәтенән беҙҙең өсөн уңышлы булды, - ти Гөлсара Шамил ҡыҙы. - 1-се класс уҡыусыһы Шәүрә Усманова "Белая куница" төбәк-ара йыр конкурсында ҡатнашып, дипломант булды. Айһылыу Фазылйәнова, Данис Исмәғилев "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында лайыҡ урын алдылар. Шәжәрә байрамдарын да ҡалдырмайбыҙ. Шәжәрәһен 20 быуынына тиклем өйрәнгән балалар ҙа бар".

Балалар баҡсаһынан быйыл 33 бала сығарыла. 31-е ошонда уҡ уҡырға ҡала. Бер уҡыу йортонда балалар баҡсаһы менән башланғыс мәктәпте берләштереүе ни тиклем отошло булыуы асыҡ күренә хәҙер. Башҡорт телен үҙләштереүҙә күсәгилешлек һаҡлана, балалар мәктәптән сыҡҡас та үҙ телен онотмай. "Положение буйынса балалар баҡсаға өс йәштән алына ине. Ләкин бала үҙ телен иртәрәк өйрәнә башлаһын, тигән маҡсаттан, уставты үҙгәртеп, балаларҙы ике йәштән ҡабул итә башланыҡ. Әлбиттә, ата-әсә бала менән үҙ телендә һөйләшмәһә, баҡсаға йөрөп кенә телде өйрәнә алмай. Ә өйҙә лә башҡортса һөйләшкән балалар беҙҙә 4-се синыфты бөтөүгә матур итеп әҙәби телдә аралаша. Күптәре аҙаҡ Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһына уҡырға инә", - ти директор.

Мәғариф системаһындағы үҙгәрештәр был тәрбиә-белем усағын да урап үтмәне. "Федераль компонент индерелеүе арҡаһында башҡорт теле хәҙер өс сәғәт кенә уҡытыла. Башҡорт теле кәмегән хәлдә лә, уҡыу-уҡытыу, тәрбиә эшен башҡортса үткәреп, балаларға телде башҡа саралар аша өйрәтергә тырышабыҙ. Оптималләштереү барышында Өфөлә беҙҙең кеүек уҡыу йорттары ҡалманы. Шуға күрә беҙ ҙә киләсәк көнгә ышанысла ҡарай алмайбыҙ", - тип борсолоу белдерә Г. Килдеғолова.

### Сағыштырып ҡарағанда...

Ата-әсәләр уҡыу йортононң эшмәкәрлеге менән ҡәнәғәт, балаларын бында ҙур теләк, ышаныс менән килтерәләр. Уларҙың бер-нисәһе, шулай уҡ ҡайһы бер ҡунаҡтар менән һөйләшеп алдыҡ. Гөлсәсәк Аҙнаева, мәҫәлән, балалар баҡсаһына өс йәшлек ҡыҙын йөрөтә икән. "Балам үҙ телен белеп үҫһен, тигән теләк менән уны ошонда бирҙем. Икенсенән, эшем дә яҡын. Тәрбиәселәр бында иғтибарлы, яғымлы. Башҡа баҡсаларҙа балалар сирләп бара. Бында ауырымайҙар. Ҡыҙымды уҡыуға ла ошонда биреп, аҙаҡтан 20-се ҡала Башҡорт гимназияһында уҡытырға уйлайбыҙ. Мин үҙем дә, ирем дә шул гимназияны тамамланыҡ", - ти әсә.

Һабантуйға килгән атайҙарҙың береһе Әлим Ғәлимов: "Улым элек икенсе балалар баҡсаһына йөрөгәйне, бында биргәйнек, уны алыштырҙылармы ни! Донъяға ҡарашы, холҡо, тәртибе, үҙ-үҙен тотошо ыңғай яҡҡа һиҙелерлек үҙгәрҙе", - ти.

Балалар һабантуйына саҡырылған ҡунаҡтарҙың береһе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының яуаплы секретары Сәүиә Ғәзизова ла сара тураһында фекере менән уртаҡлашты: "Өфөлә ете башҡорт гимназияһы бар. Ә бала ошо уҡыу йорттарына телде яҡшылап белеп килһен өсөн, уларҙы мәктәпкәсә йәшендә үк өйрәтергә кәрәк. Әлбиттә, бөтә Өфөгә бер башҡорт балалар баҡсаһы ғына етмәй. Һәр микрорайонға кәм тигәндә икешәр ошондай уҡыу йорто кәрәк, сөнки баш ҡалала нисәмә мең башҡорт йәшәй. Ошо баҡсаға сират, конкурс бик ҙур, бында эләгеүе еңел түгел".

Әүҙем йәмәғәтсе Әнүзә Йомағолова әйтеүенсә, башҡа балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре булдырылһа ла, уларҙың эше һөҙөмтәле, яҡшы кимәлдә түгел. "Балалар баҡсаларын тикшергәндә ул төркөмдәрҙә йүнләп башҡорт телен белмәгән, башҡа милләттән булған тәрбиәселәр эшләүе асыҡлана. Мөдирҙәре менән тығыҙыраҡ эшләп, ошо юҫыҡтағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрәһе бар", - ти Әнүзә Ишдәүләт ҡыҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар һабантуйы - ҙур әһәмиәткә эйә булған тәрбиәүи сара. Уның баш ҡалабыҙҙа үткәрелеүе мөһимлеген тағы ла арттыра. Шулай ҙа һүҙ байрам хаҡында түгел, ә борсоған проблема хаҡында булды. Был тәбиғи, сөнки ошондай сараларҙы, хатта киң яландарҙағы һабантуйҙарҙы ла беҙ байрам итеү теләгенән үткәрмәйбеҙ, ә халҡыбыҙҙың рухиәтенә ҡағылған проблемаларҙы хәл итеүҙең бер ысулы итеп ҡарайбыҙ.**

**Иҡсан МӨНИРОВ**
**яҙып алды.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# МӨСТӘНЛӘП...

## күп йөрөргә яратаһың

**Беҙҙең Ғафури районы Юлыҡ ауылы һөйләше Урта һөйләшкә ҡарай. Әҙәби телдән айырмалы рәүештә, "д" урынына "т" өнө һәм башҡа һөйләштәрҙә булмаған йәки бик һирәк осраған ивит+ә тигән һүҙ бик йыш ҡулланыла. Телмәребеҙҙә шулай уҡ ялғауҙары өндәре яғынан айырымланған; башҡорт әҙәби телендәге һүҙҙәр менән сағыштырғанда бөтөнләй башҡа сығанаҡлы һәм әҙәби телдә бер мәғәнәлә, һөйләштәрҙә икенсе мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәр бар.**

**Инте** - инде
**Анта** - унда
**Мынта** - бында
**Бәкәс** - бәләкәс
**Еңкә** - еңгә

**Мөстән** - урам буйында күп йөрөргә яратыусы
**Көтөй** - көсөк
**Сирек** - өс литрлы банка

**Шылды** - ҡасты
**Инәй (иней)** - әсәй
**Әсәй (әсей)** - Өләсәй

**Рәзинә ЗӘЙНЕТДИНОВА,**
**Стәрлетамаҡ педагогия академияһы студенты.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОНЪЯ - ЙОҘАҠ,

## аҫҡысы - белем

Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был донъяла бер ниндәй хәүефһеҙ нәмә юҡ, хәүефтән ҡотолор ысулдар ғына бар.

**(МакАртур).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һин ғәҙәттәрең менән йәшәйһең, дөрөҫөрәге, ғәҙәттәр һинең менән йәшәй. Ғәҙәттәрҙең үҙ энергияһы бар, шуға ла улар һәр саҡ дауамлы була. Әлбиттә, улар энергияны һинән ала, һин элек тә, хәҙер ҙә улар менән хеҙмәттәшлек итәһең. Тора-бара ғәҙәттәрең һинең хужаға, ә һин уларҙың хеҙмәтсеһенә, бары тик ҡулғәһенә әйләнәһең. Ғәҙәттәрең һиңә бойороҡ бирә, һин уларҙы һис һүҙһеҙ тормошҡа ашыраһың...**

**...Әхмәт исемле ишан сираттағы тапҡыр хаж сәфәренә йыйына башлаған. Уға башҡа дин әһелдәре лә ҡушылған. Был юлы ишан һәм уға эйәргән дин әһелдәре хаж сәфәрендә бер йыл булырға ниәтләй. Юлға сығыр алдынан ишанға был тирәлә даны таралған бур килә. "Мин бур һәм һинең эргәңдә булырға лайыҡлы түгелмен икәнен беләм. Ләкин һин миңә өмөт бир һәм үҙең менән бергә хаж сәфәренә ал, зинһар..." ти. "Был минең өсөн бик ауыр ҡарар, - ти ишан. - Беҙ был юлы хаж сәфәрендә бер йыл булабыҙ, һин шул осорҙа түҙмәҫһең, тағы урлаша башларһың. Шуға ла был уйыңды башыңдан сығарып ташлау хәйерлерәк булыр..." Әммә бур ныҡышыуын белә: "Ошо бер йыл эсендә мин бер нәмә лә урламаясаҡмын, һүҙ бирәм..." Ишан ризалаша. Урынға барып, бер аҙна үткәс, ишан менән бергә килгән төркөм эсендә аңлашылмаған хәлдәр башлана. Хаж ҡылыусыларҙың сумаҙанынан берәм-берәм әйберҙәр юғала. Ләкин бер нисә көндән юғалған әйберҙе икенсе кешенең сумаҙанынан табалар. Ә ул кеше был әйберҙең үҙ сумаҙанына нисек килеп эләгеүе тураһында бер ни ҙә белмәй. Ишан был хәлдең кем тарафынан ойошторолоуын аңлай һәм бер төндө йоҡламайынса күҙәтергә була. Төн уртаһында улар йоҡлаған бүлмәгә баяғы бур килә һәм бер кешенең сумаҙанынан әйбер алып, уны икенсе кешенең сумаҙанына һала. Ишан: "Ни эшләйһең һин? Һин бит вәғәҙә бирҙең!" - тип ҡысҡырып ебәрә. "Мин үҙемдең вәғәҙәмде үтәйем дә инде, - ти бур. - Мин бер ни ҙә урламайым. Ләкин ғәҙәтемде ҡайҙа ҡуйайым? Төн уртаһында ниҙер урларға сыҡмаһам, йоҡлай алмайым. Миңә бер йыл буйы йоҡламаҫҡамы ни улай булғас? Һин бит изге йән. Һин мине лә йәлләргә тейешһең. Мин бер ни ҙә урламайым. Был әйберҙәр бер ҡайҙа ла юғалмай, улар бер сумаҙандан икенсеһенә генә күсә һәм һәр саҡ табыла. Хаж сәфәренән ҡайтҡас, миңә бит тағы ла ошо ғәҙәтемә буйһонорға тура киләсәк, шулай булғас, мин ул оҫталығымды оноторға тейеш түгелмен..."**

**Бына шулай, һәр кем үҙ ғәҙәттәренең ҡорбаны. Ғәҙәттәрең һәр ваҡыт һинең менән идара итә. Шунан инде һин тотҡон, ҡол тормошо менән йәшәйһең. Төрмә һинең ғәҙәттәреңдән, һин ҡылған ҡылыҡтарҙан хасил була..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 2196